ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
12-18 август (урағай) 2023
№31 (1073)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ат аунаған ерҙә...**
төк ҡала



6

**Үҙгәреш булыуын теләһәң,**
үҙеңә үҙгәрергә кәрәк!



7

**Беҙ йәш саҡта...**
хәйер, бөгөнгө йәштәргә лә шөкөр бит



10

**Атайсал тип янғандар...**
батыр ауылы Кинйәлә йәшәй



12-13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар булһа, әйтегеҙ: улар 15 августа тиклем яҙылып, сентябрҙән алдыра башлай ала - 4 айға яҙылыу хаҡы 532 һум 40 тин. Шулай уҡ ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда 771 һум 12 тингә яҙылырға мөмкин.*
*Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

КӨНАУАЗ

# ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ ГЕНӘ...

## кешенән шәхес яһай



**2022 йылдың 16 ноябрендә Рәсәй Дәүләт Думаһында уҙғарылған Хөкүмәт сәғәтенә илдең мәғариф министры Сергей Кравцов та саҡырылғайны. Тап шунда Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин мәктәптәргә хеҙмәт тәрбиәһен кире ҡайтарыу мәсьәләһен күтәрә. Баҡтиһәң, "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы федераль закондың 34-се статьяһына ярашлы, белем алыусыларҙың йәйиһә балиғ булмаған уҡыусыларҙың ата-әсәләре ризалығынан башҡа уларҙы ниндәй ҙә булһа хеҙмәткә йәлеп итеү тыйылған булған. Ошондай "тоҙһоҙ", хатта шәхес үҫеше өсөн зыянлы норманы кем законға индергәндер - уныһы хәҙер ҡараңғы.**

(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЭШЛӘП ЙӨРӨҮСЕГӘ...

СОЦИАЛЬНЫЙ ФОНД РОССИИ

Ошо йылдың 1 августынан Рәсәй Социаль фонды 2022 йылда эшләгән пенсионерҙарҙың страховкалы пенсияларын ҡабатанан иҫәпләне. Был өҫтәмә былтыр эш биреүселәр страховка иғәнәһе түләгән ҡартлыҡ һәм инвалидлыҡ буйынса бөтә пенсия алыусыларға ҡағыла. Билдәле коэффициент буйынса арттырылыусы индексациянан айырмалы рәүештә, август түләүҙәре пенсионерҙың эш хаҡына бәйле буласаҡ: ул юғары булған һайын, пенсияһы ла күберәк арта. Яңы күләмдәге пенсияны республиканың 219 мең пенсионеры аласаҡ һәм быйың өсөн бер ҡайҙа ла мөрәжәғәт итеү кәрәкмәй, ул автоматик рәүештә башҡарыла. Аҡса эшләп йөрөгән һәм былтыр эшләгән пенсионерҙарға ошо айҙа уҡ пенсиялары графигына ярашлы күсереләсәк. Страховкалы пенсияны арттырыуҙан тыш, 1 августан дәүләт тарафынан өҫтәп түләнеүсе ҡатнаш пенсия программаһында ҡатнашыусыларҙың тупланма пенсия күләменә лә өҫтәләсәк.

*ЙӘШТӘР ҠОРО*

# ХАЛҠЫМА НИСЕК ФАЙҘА КИЛТЕРӘЙЕМ?

## Үҙебеҙгә ошо һорауҙы биреп йәшәйбеҙ

**Үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫырға торған йәштәр - сығарылыш синыф уҡыусылары өсөн иң тулҡынландырғыс мәл хәҙер. Илдең юғары уҡыу йорттарында ҡабул итеү һынауҙары тамамланып, иң-иңдәрҙе һайлайҙар ошо көндәрҙә. Беҙ әңгәмәләшкән егеттәр ҙә ҡасандыр ошо тулҡынландырғыс минуттарҙы кисергән, хәҙер инде Мәскәүҙә ҡанат нығытып, үҙ һуҡмағынан атлаусылар. Улар - Мәскәү политехник университеты студенты Ғәзинур Ырыҫмөхәмәтов, И.М. Губкин исемендәге Нефть һәм газ Рәсәй дәүләт университетынан Урал Әхмәтов менән Мәскәү дәүләт төҙөлөш университетынан Айҙар Бикбулатов. Йәштәр менән илебеҙҙең баш ҡалаһында юғары белем алыу, унда берегеп китеү, замандаштары тураһында һөйләштек. Был әңгәмә мәктәп тамамлап тороусыларға ла, атай-әсәйҙәргә лә ҡыҙыҡлы булыр, моғайын.**

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).




12+

✓ *Тимәк, ағымдағы йылдың 1 сентябренән башлап мәктәп уҡыусыларын уларҙың ҡулынан килерлек төрлө эштәргә йәлеп итеү законлы буласаҡ, ә был уҡыу йорттарына хеҙмәт тәрбиәһененең кире ҡайтарылыуына бәрәбәр ул.*



СӘХИФӘНӘН



# ҺАБАНТУЙ ҺАБАНТУЙСА БУЛҺЫН!

**Уф, тағы яҙам инде. Бынау һабантуйҙарҙы әйтәм, нимә тип уны шоу-концертҡа әйләндереп бөтөрөргә инде…**

Асылда, һабантуйҙың боронғо йөкмәткеһе һабан эштәре бөткәс, халыҡтың яланға сығып байрам итеүе ул. Алдынғыларҙы билдәләү, төрлө уйындар үткәреү, ырыу-ырыу халыҡтың үҙ-ара йырлап-бейеп күңел асыуын да күҙаллай әле ул.

Бөгөн нисек? Шоу-бизнеста танылыу яулаған берәй артисты саҡыралар ҙа, үҙҙәренең мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен ҡаҙан төбөнә ҡуялар. Милли кейемдә, арып-талып, шунда килгән түрә-ҡараны, "бөйөк" артистарҙы һыйлап торорға! Ул саҡырылған артистары шоу-бизнеста ни тиклем "текә", шул тиклем ҡиммәт. Ә район ни тиклем ҡиммәтерәкте саҡыра, шул тиклем текә! Татарстандан килтергәндәре былтыр уҡ 500 мең дә, 700 мең ине, быйылғыһын белмәйем. Белһәгеҙ, яҙырһығыҙ.

Ә ул артистың һабантуйға хәжәте бармы? Уны күрергә теләгән кеше концертына барып та ҡарай ала. Халыҡты йәлеп итер өсөн шоу-ажиотаж кәрәкме? Әтеү һабантуйына кеше килмәҫме? Килмәүе лә ихтимал, сөнки күҙ буяу өсөн эшләнгән байрамдар халыҡты биҙҙереп бөттө. Шул системаны дөрөҫ итеп яйға һалып булмаймы икән ни ул!

Ә ул артисҡа түләгән аҡсаны ҡайҙан алалар? Әлбиттә, район хакимиәтенән. Ошо суммаға районға кәрәкле әйбер һатып алып, хеҙмәткәрҙәрҙең эшен ҡеүәтләп ебәрһәләр, эшләгән кеше өсөн дә, ябай халыҡ өсөн дә файҙа булыр ине. Машина хаҡына торошло бит. Әйтәйек, бер машина алып, алдынғы хужалыҡҡа бүләк иткәндә, башҡаларҙы дәртләндереү булыр ине. Хатта шул уҡ район мәҙәниәте мохтажлығына тотоноп, ҡеүәтлерәк аппаратура алғанда ла районда, ауылда эшләүсе мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре үк ялан яңғыратып йырлай алыр ине. Артистарҙан һис кәм булмаған таланттар күп бит ауылдарҙа. Уларҙы сығарырға кәрәк һабантуй сәхнәләренә! Һабантуйҙарҙа йырлау (бейеү) борон-борондан иң ҙур дәрәжә, юғары күрһәткес һаналған.

Ләкин үҙебеҙҙең мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре сүплек таҙарта, урам һеперә, һабантуй етһә, ҡаҙан төбөн һаҡлай. Шулай булғас, абруйлы мәҙәниәт хеҙмәтенә ниндәй дәрт, ынтылыш булһын!

Ғөмүмән, ауыл эшсәндәрен баһалар һабантуй байрамында ауыл халҡы һапһыҙ ҡара балта кеүек. Мәҙәниәт хеҙмәткәре лә, уҡытыусыһы ла, һабансыһы ла, һауынсыһы ла... Ҡуй инде!

**Светлана НАСЫРОВА.**

КӨНАУАЗ

# ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ ГЕНӘ...

## кешенән шәхес яһай

(Башы 1-се биттә).

Вячеслав Володин, мәктәп уҡыусыларында хеҙмәткә һөйөү, башҡа кешеләрҙең хеҙмәтенә хөрмәтле мөнәсәбәт тәрбиәләү зарурлығын билдәләп, ошолай тигәйне: "Хеҙмәт тәрбиәһенә һәм хеҙмәткә мөнәсәбәт мәсьәләһенә килһәк - әгәр ҙә хеҙмәткә икенсерәк мөнәсәбәт булһа, физикаға ла, математикаға ла, сит ил телдәренә лә, башҡа күп нәмәләргә лә икенсе ҡараш буласаҡ. Бала икенсе төрлө үҫәсәк, гармониялы буласаҡ. Ә былай - ул ҡулланыусы ғына".

Шул саҡта уҡ депутаттар алдында уҡыусыларҙы йәмғиәткә файҙалы хеҙмәткә йәлеп итеү мөмкинлеген биргән закон проектын әҙерләү бурысы ҡуйылғайны.

Ниһайәт, 2023 йылдың 20 июлендә Дәүләт Думаһы уҡыу йорттарында хеҙмәт тәрбиәһен ғәмәлгә ашырыу өсөн "йәшел ут" асҡан закон нормаларын ҡабул итте: "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы федераль законға тейешле өҫтәмәләр һәм үҙгәрештәр индерелде. Яңыртылған федераль законға уҡыусылар хеҙмәте менән бәйле ниндәй үҙгәрештәр индерелгән, шуларҙы барлап үтәйек.

Иң элгәре закондағы "тәрбиә" төшөнсәһе "белем алыусыларҙа хеҙмәткә һөйөү, хеҙмәткә һәм уның һөҙөмтәләренә яуаплы ҡараш формалаштырыу" һүҙҙәре менән тулыландырылды. Икенсенән, "белем биреү һәм тәрбиә берлеге" идеяһы мәғариф өлкәһендә дәүләт сәйәсәте һәм хоҡуҡи көйләүҙең төп принциптарының береһе итеп ҡабул ителде.



Өсөнсөнән, белем алыусыларҙың ирекле эшмәкәрлегенә (ирекмәнлегенә), уларҙың йәмғиәткә файҙалы эштәренә булышлыҡ итеү белем биреү ойошмаларының бурыстары иҫәбенә индерелде.

**Дүртенсенән, уҡыусыларҙы уларҙың һәм ата-әсәләренең ризалығынан башҡа ниндәйҙер эшкә йәлеп итеүҙе тыйған хоҡуҡи норма закондан сығарылды, шул уҡ ваҡытта уларҙы белем биреү программаһында ҡаралмаған эштәргә йәлеп итеү хеҙмәт тураһындағы ҡануниәт талаптарына ярашлы башҡарылырға тейешлеге хаҡындағы талап индерелде.**

Бишенсенән, уҡыусыларҙың төп бурыстары составында белем биреү йортоноң мөлкәтенә һаҡсыл ҡарау, унда таҙалыҡ булдырыуҙа һәм уны тәртиптә тотоуҙа ҡатнашыу ҡарала.

Тимәк, ағымдағы йылдың 1 сентябренән башлап мәктәп уҡыусыларын уларҙың ҡулынан килерлек төрлө эштәргә йәлеп итеү законлы буласаҡ, ә был уҡыу йорттарына хеҙмәт тәрбиәһененең кире ҡайтарылыуына бәрәбәр ул.

Әйткәндәй, ошо закон хаҡындағы мәғлүмәтте гәзитебеҙҙә баҫтырып сығарырға әҙерләгән арала ул Федерация Советы тарафынан тулыһынса хупланды һәм илебеҙ Президенты В.В. Путин 4 августа үҙ имзаһын ҡуйып, уны ғәмәлгә индерҙе.

Иманым камил, мәктәптәребеҙгә ғәмәли хеҙмәт тәрбиәһе ҡайта-

БАШҠОРТОСТАНЫМ!

# ТӘБИҒӘТЕБЕҘ МЕНӘН БӘХЕТЛЕБЕҘ!

**Ҡомарлы турист булмаһам да, әллә ҡайҙарҙа ятҡан сит илдәргә атлығып тормаһам да, үҙебеҙҙең Башҡортостан буйлап сәйәхәт итергә яратам. Күккә ашҡан тау-ҡаялары, йырып сыҡҡыһыҙ йәшел урмандары, йылға һәм күлдәре үҙенә тарта шулай ҙа. Шуға күрә йәй генә түгел, йылдың башҡа миҙгелдәрендә лә ғаиләм менән республиканың ниндәй ҙә булһа төбәгенә барып ҡайтабыҙ.**



Күптән түгел Шишмә районына Турахан кәшәнәһенә юл төштө. Нисәмә быуат тарихты үҙенә һыйындырған кәшәнә күңелдәрҙе ҡуҙғытып ебәрҙе. Ошо ерҙәр беҙгә тиклем әллә күпме яҙмышты күргән, бында төрлө кешеләр йәшәгән, бихисап ваҡиғалар булған. 14-15-се быуатҡа ҡараған кәшәнәнең әлегә тиклем һаҡланып ҡалыуы мөғжизәгә тиң, шуға күрә уны киләһе быуындарға ла алып барып еткереү - беҙҙең изге бурыс. Әлеге мәлдә был ерҙәрҙә ҙур музей төҙөлөүе кәшәнәнең һаҡланып ҡалыуына тағы ла бер аҙым, тип баһалана.

Сәйәхәт барышында беҙ төрлө фестиваль һәм байрамдарҙы "әләктереп" ҡалырға тырышабыҙ. Йыл һайын "Башҡортостан" милли паркы ойошторған "Ҡурсаулыҡ балы" фестиваленә барып, тәмле бал алып ҡайтабыҙ. Шулай уҡ бында умартасылар, төрлө һөнәрселәр, ҡул эштәре оҫталары ҡатнашлығындағы йәрминкә һәм оҫталыҡ дәрестәре лә бик ҡыҙыҡлы үтә. Балалар үҙебеҙҙең милли һөнәрҙәр менән таныша, үҙ оҫталыҡтарын һынап ҡарай. Быйыл "Ҡурсау-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо көндәрҙә Шишмә районында урынлашҡан "Патриот" хәрби-патриотик паркта Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан, Пермь һәм башҡа Рәсәй ҡалаларындағы юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән йәштәр менән осрашты. Аралашыу мәлендә Радий Фәрит улы Башҡортостандың эшкә урынлашыу йәһәтенән бик ылыҡтырғыс төбәккә әйләнә барыуын, шул уҡ ваҡытта квалификациялы белгестәргә лә ихтыяж булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм бында уларҙы, уҡыу йорттарын тамамлап ҡайтыусыларҙы, һәр саҡ көтөүҙәре хаҡында әйтте.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БР Хөкүмәте вице-премьеры Алан Марзаевҡа Федоровка һәм Көйөргәҙе райондарындағы төҙөлөп бөтмәгән бассейндар мәсьәләһен шәхсән хәл итергә ҡушты. "Беҙҙә ошо бассейндар менән бәлә. Аҡсаһын да табабыҙ, эшләйбеҙ ҙә, ә аҙаҡҡаса еткереп ҡуйырға хәлегеҙҙән килмәй. Был һеҙҙең бурыс, тип уйлайым", - тине Радий Хәбиров Алан Марзаевҡа мөрәжәғәт итеп.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Республикаға идара итеү үҙәгендәге оператив кәңәшмәлә Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығына яңы уҡыу йылы алдынан мәктәп туҡланыуын ойоштороуға контролде көсәйтергә ҡушты. " 1 сентябргә тиклем тағы бер тапҡыр мониторинг үткәрегеҙ, контроль идаралығын йәлеп итегеҙ. Балаларға һалҡын һыу, ҡулланыу ваҡыты сыҡҡан аҙыҡ-түлек биреүҙәре өсөн урында уҡ "атырға" мөмкин. Ситтән ит индермәйбеҙ, Аллаға шөкөр, аҙыҡ-түлек үҙебеҙҙеке булырға тейеш", - тине Радий Хәбиров.

✓ Башҡортостан Хөкүмәтенең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин 1 сентябрҙә Донбастан 209 баланың республика мәктәптәренә уҡырға киләсәге хаҡында һөйләне. Быйылғы йылда ярты миллиондан ашыу бала, шул иҫәптән 54 мең беренсе класс уҡыусыһы өсөн яңы уҡыу йылы башланасаҡ.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте республикала йәшәгән ишле ғаиләләрҙең айырым категорияһына торлаҡ сертификаттары биреү тәртибе тураһында Положениеға үҙгәрештәр индерҙе. Хөкүмәттең ошо ҡарарына республика Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Документҡа ярашлы, хәҙер махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандарҙың ишле ғаиләләре лә торлаҡ сертификаттары алырға хоҡуҡлы.

рылғас, ата-әсәләр ҙа бик риза булыр, тип ышанайыҡ. Ошо яңылыҡ бала саҡ, хәтергә һеңеп ҡалған мәктәп йылдары менән бәйле үткән заманды иҫкә төшөрә: беҙ, ауыл балалары, бәләкәй саҡтан уҡ ҡулдарыбыҙға көрәк-һәнәк, тәпке, балта-бысҡы тотоп, ғаиләләребеҙҙә лә, мәктәптә лә ололарға ярҙам итешеп үҫтек. Бер еребеҙ ҙә кителмәне, хеҙмәт емештәренең ләззәтен татырға өйрәндек. Әле лә хәтеремдә, 1964 йылдың октябрь баштарында, көҙгө ямғырға ҡарамай, класташым Рафил Яруллин менән ауыл артындағы совхоз баҫыуында, итектәребеҙ менән еүеш ергә бата-бата, картуф йыйып, шунда ултырған трактор арбаһына ташыныҡ. Район үҙәгенән ауылыбыҙға ниндәйҙер йомош менән килгән бер йәш ир-егет, "УАЗ" машинаһынан төшөп, исем-фамилияларыбыҙҙы яҙып алған ине. Нишләптер, бер аҙ шөрләберәк тә ҡуйҙыҡ, ул-был булмағайы, тип. Ике-өс аҙна үтеүгә мәктәп линейкаһында икебеҙгә лә уңыш йыйыуҙа әүҙемлек күрһәткәнебеҙ өсөн ВЛКСМ-дың Ҡыйғы райкомының Маҡтау грамоталарын тапшырҙылар. Ә инде картуф ҡаҙыуҙа ҡатнашҡаныбыҙ өсөн 14-әр һум аҡса ла алғас, сәстәре ҡырылған түпәләребеҙ күккә тейгәндәй булды...

Ошо яңылыҡ әҙәми заттарҙың хеҙмәткә һәләтле булыуы һөҙөмтәһендә генә кешелек донъяһының үҫешә барыуы, прогресҡа өлгәшеүе хаҡындағы фәлсәфәүи уй-фекерҙәрҙе яңырта. Ғөмүмән, тәү тормош эпохаһында уҡ ашарға яраҡлы үҫемлектәрҙе йыйыуҙан уларҙы сәсеп үҫтереүгә күсеүгә, һунарға йөрөүҙән йәнлектәрҙе эйәләштереп, йорт хайуандарын үрсетә башлауға, таш-таяҡ ҡулланыуҙан алып хеҙмәт ҡоралдарын яһарға өйрәнеүгә тиклем кешелек аңлы хеҙмәт юлына баҫа - ә быны, һис бер икеләнмәйенсә, кешелектең прогресс юлы, тип нарыҡларға була. XIX быуат философтарының береһе - Фридрих Энгельстың "Кешене хеҙмәт кеше иткән", тигән һығымтаһын әлегә тиклем бер кем дә инҡар итә алғаны юҡ.

Шул бөйөк фекергә өҫтәп, иң тәүҙә тәрбиә булған, тип әйтеп тә булыр ине. Бала аҫрауҙа һәм үҫтереүҙә махсус ойошторолған белем биреүҙән меңәр йыл элегерәк хеҙмәт тәрбиәһе ғәмәлдә булған - был кешелектең магистраль юлы ул. Белем биреү, уҡытыу - дәүләттәр барлыҡҡа килгәс кенә, кешелектең тарихи күҙлектән ҡарағанда сағыштырмаса күптән түгел кисергән заманаларында ғына бар булған. Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа тәрбиәне, шул иҫәптән хеҙмәт тәрбиәһен мәғариф системаһынан айырып алыу - йәмғиәтебеҙ, дәүләтебеҙ тарафынан ебәрелгән етди хата булды. Ошо хатаны тиҙ арала төҙәтеүҙе илебеҙ киләсәген хәстәрләүгә тиндер, тип әйтергә була.

Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ - хәҙерге оло һәм урта быуын кешеләре совет мәғарифы буйомға ашырған тәрбиә һәм белем биреү системаһы шарттарында шәхес булараҡ формалашты. Фән нигеҙҙәрен өйрәнеү хеҙмәт тәрбиәһе менән ҡуша барҙы ул заманда. Совет кешеләре ябай хеҙмәт күнекмәләрен бала саҡтан үҙләштерә ине, ә коллектив менән ниндәй ҙә булһа эштәр башҡара алыу - хеҙмәт тәрбиәһенең үҙәге булды. Эшлеклелек, булдыҡлылыҡ, башҡалар менән килешеп эшләй алыу, ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға өйрәнеү кеүек үтә мөһим сифаттар тәрбиәләй ине уҡыусыларҙа совет мәктәбе.

Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә совет мәғариф системаһын йышыраҡ иҫкә төшөрә башланылар - быны шулай килеп сығыуын алдан уҡ һиҙемләргә лә булыр ине. Әлбиттә, үткән заманға кире ҡайтып булмай. Әммә ошо замандың ысын, һөҙөмтәле ҡаҙаныштарын, уҡытыу һәм тәрбиә биреү метод-алымдарын хәҙерге мәғариф системаһына кире ҡайтарыуҙан беҙ тик уңыр ғына инек. Күптән үткән тарихыбыҙҙы иҫкә төшөрөп, тәүге совет дөйөм белем биреү учреждениеларының "берҙәм хеҙмәти политехник мәктәп" тип аталыуы ла һис тә тиккә булмағандыр, тим. Бөгөн дә, донъяла компьютер технологиялары сәскә атҡан бер мәлдә, яһалма интеллектҡа юл асылған дәүерҙә, мәғарифта ябай хеҙмәт тәрбиәһенән ваз кисеү ғәфү итмәҫлек хатаға тиң булыр ине. Үрҙә бәйән ителгән закондың ҡабул ителеүен дә ошо өлкәлә алға китеш шарттарын тыуҙырыуға бер аҙым, тип ҡабул итергә кәрәктер.

Гәзит уҡыусылар үҙҙәре был "иҫке" яңылыҡты нисек ҡабул итте икән? Фекер алышырға саҡырабыҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

лыҡ балы" фестивале Баймаҡ районында үтәсәк "Башҡорт аты" байрамы менән тура килеүе генә күңелде өйкәп тора, сөнки ике урынға ла барғы килә. Ошондай матур, йөкмәткеле байрамдарҙы уҙғарыу ваҡыттарын төрлөсә итеп ҡуйыу яйын тапһалар ине, тигән теләгемде белдерәм.

Июль аҙағында тағы ла бер матур һәм иҫтәлекле сара - Ғафури районында уҙған "Йылым-фест 2023" байрамында булып ҡайттыҡ. Ул яҡтың матурлығын һүҙ менән аңлатырлыҡ түгел, барыһына ла барып, үҙ күҙҙәре менән ҡарарға тәҡдим итәм. Ә тере музыка фестивале иһә юғары кимәлдә үтте, үҙем өсөн байтаҡ таланттарҙы астым һәм рәхәтләнеп ял иттем. Ойоштороусыларға "Афарин!" тиергә генә ҡала.

Белорет яҡтарына электричкала барыуҙы ҡулай күрәбеҙ, сөнки заманса, бөтә шарттары булған поезда йөрөүе, берҙән, уңайлы, икенсенән, ул тарафтарҙағы тәбиғәт матурлығы поезд тәҙрәһенән иҫ киткес булып асыла. "Алһыу ҡаялар", "Айғыр" (Айгир), "Ирәкташ" ("Инзерские зубчатки") - ғөмүмән, был райондың тәбиғәте һоҡланып туйғыһыҙ. Әреүәкрәз тауына күтәрелеүебеҙ күңелдәрҙә мәңге йәшәйәсәк. Рәсәйҙән генә түгел, сит илдәрҙән дә килгән туристар менән бергә Урал һыртының иң бейек түбәһенә күтәрелеп, ҡунаҡтарҙың һоҡланыуҙан телһеҙ ҡалыуына шаһит булдыҡ. "Иҫ китмәле тәбиғәтегеҙ булыуы менән һеҙ ниндәй бәхетлеһегеҙ", - тине Мәскәү туристы Игорь. Ысынлап та, унын менән килешмәү мөмкин түгел.

Матур күренештәр эҙләп Өфөнән йыраҡ китәһе лә түгел. Мәҫәлән, Иглин районы Асҡаныш ауылы тирәләй ҙә иҫ киткес матур тәбиғәт, таҙа Сөн йылғаһы, тиҡ ҡыҙыныу өсөн генә түшәлгән кеүек ҡом - барыһы ла иң яҡшы тәьҫораттар ҡалдыра. Шулай уҡ беҙ йәйге сәйәхәттәребеҙҙе Архангел районында урынлашҡан Абҙан шарлауығында асып ебәрәбеҙ. Әлбиттә, Ниагара шарлауығы кеүек мөһабәт һәм күп һыулы түгел, ләкин үҙенең тешкә үтер һалҡынлығы һәм таҙалығы менән күңелдәрҙе мәңгегә арбай. Әйткәндәй, шарлауыҡ янындағы Инйәр иң йылы йылғаларҙың береһе икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алғым килә. Хатта июнь башында ла, әгәр көндәр йылы торһа, Инйәр һыу инерлек йылылыҡта була.

Республикабыҙ матур һәм бай, тәбиғәтебеҙ күркәм, ҡәҙерен белеп йәшәйек, дуҫтар.

**Әлиә ҠАРАМУРЗИНА.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# ЙӨҘӨН ЮҒАЛТҠАН ВЛАСТЬ



**Халыҡ хәтере тере, ул яҡшыны ла, яманын да онотмай - быуындан-быуынға тапшырып килә. Хатта сәйәси шарттар ҙа, ил етәкселәренең теге йәки был ҡараштa тороуы ла тере хәтерҙе юҡ итә алмай. Хатта бөгөн бөтә кешелек донъяһын хәүеф аҫтында тотоусы атом бомбаһы ла юҡ итә, көйҙөрә һәм яндыра алмай уны.**

Япон халҡы үҙенең мәңгелек ҡайғыһы, кешелек тарихындағы ҡот осҡос фажиғә булған Хиросима менән Нагасаки һәләкәтен дә ғүмерендә лә, власть башына ниндәй генә ике йөҙлө, сит сәйәси баҫымға дусар ҡурҡаҡ әҙәмдәр килеүенә ҡарамаҫтан, онотмаясаҡ. Шуға күрә лә Япония халҡы йыл да Хиросима менән Нагасаки фажиғәһендә һәләк булған, янып көлгә ҡалған ватандаштары - золомлоҡтоң гонаһһыҙ ҡорбандары иҫтәлеген шартлауҙың үҙәк урынында хәтергә алыу өсөн йыйыла. Бындай матәм церемонияһы быйыл да Хиросиманың Тыныслыҡ паркында булып үтте. Шартлауҙан һуң иҫәпһеҙ күп һәләк булыусыларҙы яндырған урында ҡалҡып сыҡҡан монументҡа: "Тыныс йоҡлағыҙ, бындай хата башҡаса ҡабатланмаҫ",- тип яҙылған.

Халыҡ тыныслыҡ теләй. Бынан 78 йыл элек атом бомбаһы шартлауының шаһиттары ядро ҡоралын тыйыу тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыуын талап итеп, Япония премьер-министры Фумио Кисидаға мөрәжәғәт итте. Кисида исеменә уларҙың талабында: "Тыныслыҡҡа фәҡәт ядро ҡоралын тыйыу хаҡында килешеү ярҙамында ғына өлгәшергә була", - тип әйтелә. Әммә ил башлығы йәмәғәтселек талабына дөйөм һүҙҙәр һөйләү һәм вәғәҙәләр биреү менән генә сикләнде, тип билдәләнә үҙәк матбуғат сығанаҡтарында.

Америка тарафынан атом бомбаһына тотолған Хиросима, Нагасаки фажиғәһе ҡорбандарын иҫкә алыу церемонияһында Япония хөкүмәте ағзалары, халыҡ-ара ойошмалар һәм 110-лаған дәүләттең, шул иҫәптән АҠШ менән Украинаның да, дипломатия вәкилдәре ҡатнашты, ә бына Рәсәй менән Беларусь илселектәренә саҡырыу ҡағыҙы ебәрелмәне, тип яҙа донъя күҙәтеүселәре. Һәм, ғөмүмән, матәм сараһы быйыл Рәсәйгә ҡаршы ойошторолған ниндәйҙер бысраҡ акция кеүегерәк ҡабул ителде, сөнки унда сығыш яһаусы премьер-министр Кисида, Хиросима мэры Мацуи менән губернаторы Юдзаки бөтәһе лә атом бомбаһы ташлаған АҠШ-ты түгел, ә бөгөн донъяла барған ядро янауы көсөргәнешендә нишләптер урынһыҙ һәм нигеҙһеҙ рәүештә Рәсәйҙе телгә алдылар. Хатта ки Америка тарафынан атом бомбаһына тотолған Хиросима фажиғәһе айҡанлы БМО-ның Генераль секретары Антониу Гуттериштың яҙып ебәргән сығышында ла бер генә тапҡыр ҙа агрессор АҠШ телгә алынмай. Ғәжәп! Тиҙҙән, былай булһа, яуызлыҡ һәм кеше үлтереүселәрҙең исеме онотоуға дусар ителәсәк бит! Нисек кенә булмаһын, рәсми Токио Хиросима менән Нагасакины атом бомбаһына тотоусы Вашингтондың ғәйебен йомшартып күрһәтеү генә түгел, ә енәйәтсенең ысын йөҙөн халыҡ хәтеренән бөтөнләй юйырға маташа түгелме? Халыҡ хәтере - мәңгелек, ә бына Япония властары үҙҙәренең хәтерен дә, ысын сәйәси йөҙөн дә, эйе, юғалтҡан. Бындай ике йөҙлөлөк һәм агрессор алдында туҡтауһыҙ ялағайланыу илде артабан ҡайҙа алып барыр - билдәһеҙ...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа төҙәтмәләр әҙерләй. Закон Еңеү көнөндә байраҡтың күсермәһен ҡулланыу хаҡындағы законды үтәмәүселәргә штраф һалыуҙы күҙ уңында тота. Вазифалы кешеләр өсөн штраф - 10 меңдән 15 мең һумға тиклем, юридик шәхестәр өсөн 20 меңдән 25 мең һумға тиклем тәшкил итәсәк. Былтыр декабрҙә республикала Еңеү көнөндә административ биналарға Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан флагтары менән бер рәттән Еңеү байрағының күсермәһен ҡуйыу буйынса тейешле закон ҡабул ителгәйне.

✔"Башинформ" агентлығына республика Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 4-6 августа Пермдә еңел атлетика буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары үткән. Күмертау ҡалаһы спортсыһы Ислам Мирасов 100 метрға йүгереүҙә еңеүсе тип танылa, ә оҙонлоҡҡа һикереүҙә 2-се урынды яулай. 400 метрға йүгереүҙә 4-се урын алған иң йәш ҡатнашыусы Айнур Әбсәләмовтың уңыштарын да билдәләп үткәндәр.

✔Бюджет инвестициялары буйынса эксперт советы ултырышында Премьер-министр Андрей Назаров 2023 йылға Республика адреслы инвестиция программаһы күләменең 31,7 миллиард һум тәшкил итеүен иҫкә төшөрҙө. Аҡса милли проекттар объекттарын, шулай уҡ вуз-ара студенттар кампусын төҙөү буйынса сараларҙы өҫтәмә финанслауға, республика кардиология үҙәгенең хирургия корпусын, Республика балалар онкологияһы һәм гематологияһы үҙәген төҙөүгә, Өфөнөң 115-се гимназияһын яңыртып төҙөүгә йүнәлтелгән.

✔Башҡортостандан 16 йәшлек спортсы Илья Кандалин грек-рим көрәше буйынса донъя беренселегендә чемпион исемен алды. 17 йәшкә тиклемге спортсылар араһындағы ярыштар Истанбул ҡалаһында уҙҙы. Финал алышында Октябрьскийҙың көрәш мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Әрмәнстан спортсыһы Артур Брояңды 9:0 иҫәбе менән еңде. Илья Кандалин грек-рим көрәше буйынса Европа беренселегендә лә еңеү яулағайны.

✔Тиҙҙән аҙыҡ-түлек һәм химия сәнәғәте өлкәһендә эшләгән, шулай уҡ бетон һәм тротуар плиткаһы етештереү менән шөғөлләнгән тағы дүрт компания "Алға" махсус иҡтисади зонаһының резиденттары булырға мөмкин. Әлеге ваҡытта улар менән һөйләшеүҙәр алып барыла. "Алға" махсус иҡтисади зонаһы майҙансыҡтарында инженер һәм транспорт инфраструктураһын әҙерләү буйынса эштәр бара.

ҠЫҪҠАСА

# ҠОРОЛОҠ АЯҠ САЛДЫ

**Башҡортостандың бер нисә районында ҡоролоҡ менән бәйле ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелде.** Билдәле булыуынса, Әлшәй, Баҡалы, Балаҡатай, Бөрө, Благовар, Благовещен, Бүздәк, Дәүләкән, Дыуан, Дүртөйлө, Иглин, Илеш, Ишембай, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Краснокама, Мәсетле, Мишкә, Миәкә, Салауат, Тәтешле, Хәйбулла, Саҡмағош, Шаран һәм Яңауыл районданында 28 августа тиклем ғәҙәттән тыш хәл режимы ғәмәлдә. Был муниципалитеттар ғәҙәттән тыш хәл зонаһы тип танылды.Тармаҡ ойошмаларына крәҫтиән-фермер хужалыҡтары вәкилдәре менән берлектә ҡоролоҡ әҙемтәләрен йомшартыу буйынса саралар күрергә ҡушылды. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығына ауыл хужалығы культуралары һәләк булыу арҡаһында килгән зыянды һәм уларҙы үҫтергәнсе тотонолған сығымдарҙы дәлилләгән документтар әҙерләргә кәрәк. Бойороҡтоң үтәлешен контролдә тотоу Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахмановҡа йөкмәтелде.

✔ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларының йәш педагогтары өсөн 575 мең һумлыҡ гранттар тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. "2024 йылдың 1 ғинуарынан белем биреү ойошмаларында эшләгән һәм мәктәпкәсә белем биреү программаларын тормошҡа ашырған йәш уҡытыусыларға Башҡортостан Республикаһы Башлығының һәр береһе 575 мең һумлыҡ 50 грантын булдырырға", - тиелә указдың тексында. Республика Хөкүмәтенә Башҡортостан Башлығы гранттары тураһында положениены һәм уларҙы түләү тәртибен раҫларға ҡушылды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы "Канатлан!" мәктәп мәғарифы форумының пленар ултырышында мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары уҡытыусылары өсөн 50 грант булдырырға тәҡдим иткәйне.

✔ **Дәүләт Думаһына махсус хәрби операция барышында һәләк булған йә беренсе төркөм инвалиды булып ҡалған һалдаттарҙың поручителлек килешеүе буйынса йөкләмәләрен бөтөрөү тураһында закон проекты тәҡдим ителгән.** Был хаҡта Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Андрей Турчак үҙенең телеграм-каналында яҙған. Уның һүҙҙәренсә, башланғыс махсус операция буйынса төркөм тарафынан әҙерләнгән. "Бындай осраҡтарҙа махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың кредит йөкләмәләре тулыһынса бөтөрөлә. Әммә кредит буйынса поручителлек менән был мөмкин түгел - суд закон нигеҙендә бурыстарҙы уның варистарына йөкмәтә, - тип яҙа Андрей Турчак. - Был дөрөҫ түгел. Әгәр яугир тыуған иле өсөн аҙаҡҡа тиклем көрәшкән икән, Ватан да уның бурыстарын үҙенә алырға тейеш. Яҡындары һәм ғаиләһе хаҡында хәстәрлек күрергә бурыслы. Уларға кредиттар түгел, ә ярҙам кәрәк".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТУҒАН ТЕЛДӘ БЕЛЕМ АЛЫРҒА!



**Дәүләт Думаһы Башҡортостан парламентының "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" федераль законына үҙгәрештәр тураһында закон проектын көҙгө сессияның эш планына индерҙе, тип хәбәр итә "Башинформ".**

- Закон проекты граждандарҙың туған телдә белем алыу хоҡуғын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән, - ти Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толчаев. - Бөгөн һәр граждандың тәрбиә һәм уҡытыу телен ирекле һайлау хоҡуғы тураһындағы конституцион норма мәғариф системаһы тарафынан тулыһынса тормошҡа ашырылмай. Ғәмәлдә, урыҫ теле туған теле булмаған белем биреү ойошмаһында уҡыусыларҙың ата-әсәләре уҡытыу теле сифатында Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре араһынан икенсе тел индереүҙе талап итә. Закон буйынса бындай хоҡуҡ ҡаралған, әммә ғәмәлдә мәктәптең уҡытыу телдәренә ҡағылышлы бөтә талаптарҙы ҡәнәғәтләндереү мөмкинлеге юҡ. Ауырлыҡтар мәғариф тураһындағы законда этномәҙәни йүнәлештәге белем биреү программаларын тормошҡа ашырыу үҙенсәлектәрен билдәләүсе положениеларҙың булмауынан килеп сыға. Беҙ был кәмселекте бөтөрөргә һәм законды этномәҙәни йүнәлештәге белем биреү программаларын тормошҡа ашырыу үҙенсәлектәре тураһында яңы норма менән тулыландырырға тәҡдим итәбеҙ. Шулай уҡ, әгәр был территорияла йәшәгән граждандарҙың хоҡуҡтары ҡыҫылмаһа, бындай белем биреү ойошмаларын билдәле бер территорияларға беркетмәскә тәҡдим ителә. Закон проектында туған тел һәм әҙәбиәт буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы рәүешендә дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү тураһында новеллалар ҙа бар.

- Бөгөн "Туған тел" һәм "Туған әҙәбиәт" - Берҙәм дәүләт имтиханы үткәрелмәгән берҙән-бер уҡыу предметтары. Төбәктәр йомғаҡлау аттестацияһын икенсе формала ойоштороға хоҡуҡлы, әммә уның һөҙөмтәләре юғары уҡыу йорттарына профилле белем биреү программаларына ҡабул иткәндә иҫәпкә алынмай. Уҡыусыларҙың имтихан тапшырыу өсөн ошо предметтарҙы һайламауы ғәжәп түгел. Мәҫәлән, ағымдағы йылда Башҡортостанда башҡорт теленән Берҙәм төбәк имтиханын ни бары ике кеше тапшырған. Татарстанда татар теленән имтиханды бер генә сығарылыш уҡыусыһы биргән. Күрһәтелгән предметтар буйынса БДИ тапшырыу мөмкинлеге абитуриенттарҙың мөмкинлектәрен киңәйтәсәк, - ти Константин Толчаев һәм этномәҙәни йүнәлештәге белем биреү ойошмаларының статусын аныҡлау Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә хеҙмәт итәсәк, тип иҫәпләй.

# РӘСӘЙ ТАБИПТАРЫ - ӨФӨЛӘ



**Башҡортостандың баш ҡалаһында РФ һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко һәм төбәк Башлығы Радий Хәбиров илдә беренсел медицина-санитар ярҙам күрһәтеүҙе үҫтереүҙең көнүҙәк мәсьәләләренә арналған Бөтөн Рәсәй кәңәшмәһендә ҡатнашты.**

Михаил Мурашко үҙенең сығышында Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау системаһын камиллаштырыу буйынса байтаҡ ҡына проекттарҙың уңышлы рәүештә ғәмәлгә ашырылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды: былар - беренсел звенояы модернизациялау, онкология, йөрәк һәм ҡан тамырҙары сирҙәренә дусар булғандарға ярҙам күрһәтеү, профилактик тикшереүҙәр программаһы һәм диспансеризациялау. Шуға күрә лә ошо кәңәшмәнең тап Өфөлә уҙғарылыуы маҡсатҡа ярашлы, тип баһа бирҙе министр.

Конференция-кәңәшмәгә Рәсәй төбәктәренән һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтары етәкселәре, федераль ведомстволар вәкилдәре, эре дауалау учреждениеларының баш табиптары, медицина тармағы буйынса эксперттар килгәйне.

Республика Башлығы үҙенең сығышында һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын модернизациялау программаһын бойомға ашырыуға юғары баһа бирҙе: "Төбәгебеҙҙең идара итеүсе командаһы ҡарашынса, һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын модернизациялау программаһы - иң һөҙөмтәлеләрҙән. Ул ресурстар менән тулыландырылды һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында ыңғай һөҙөмтә бирҙе. Һуңғы йылдарҙа беҙ тармаҡ эшенең төп күрһәткесен - халыҡтың ғүмер оҙайлығы үҫешен теркәп барабыҙ. Быйыл Башҡортостан бик мөһим билдәгә - 73 йәшкә өлгәште (Ғүмер оҙайлығы. - **Ред. иҫк.**). 2023 йылдың беренсе яртыһында ла ошо күрһәткестең арта барыу тенденцияһы һаҡлана".

Республика етәксеһе Башҡортостандың ҙур ҡалаларында медицина учреждениеларының матди базаһын нығытыуҙы мөһим маҡсат итеп ҡуя. Ул БР Хөкүмәтенә һәм Һаулыҡ һаҡлау министрлығына баш ҡалабыҙҙа һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын этаплап модернизациялау программаһын әҙерләү бурысын йөкмәтте.

# ТӨН ТЫНЫС ТҮГЕЛ!



**Рәсәйҙең Дәүләт Думаһы төнөн транспорт сараһында ныҡ шаулап йөрөгән өсөн штраф һалыу тураһында закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.**

Атап әйткәндә, Дәүләт Думаһы депутаттары Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа тейешле төҙәтмәләрҙе беренсе уҡыуҙа ҡабул итеп, РФ субъекттарына төнөн граждандарҙың тыныс ял итеүенә ҡамасаулаған өсөн автомобиль һәм мотоцикл водителдәренә штраф һалыу хоҡуғын биреүҙе хупланы.

"Урамдан йәки йорт ихаталарында ҡолаҡ тондорғос тауыш менән елдереүсе машина һәм мотоциклдарҙы бөтәһенең дә күргәне барҙыр, моғайын. Йыш ҡына был транспорт хужалары шундай тауыш сығарыу өсөн машиналарын махсус көйләп ала, - тип аңлатма бирҙе РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров.- Бындай тауыштар граждандарҙың һәм бигерәк тә балалар менән өлкән йәштәгеләрҙең тынлыҡын боҙа, уларҙың һаулығына зыян килтерә. Шуға ла Кодексҡа үҙгәрештәрҙә автомат рәүешендә эшләүсе тауыш кимәлен үлсәгестәр ярҙамында хоҡуҡ боҙоуҙарҙы теркәү мөмкинлеге ҡаралды. Тауышты арттырған өсөн штраф күләме транспорт сараһының категорияһы һәм двигателе ҡеүәтен иҫәпкә алып, Рәсәй субъекттары тарафынан 5 меңдән 30 мең һумға тиклем билдәләнәсәк. Шулай уҡ тауыш йотҡос системалары үҙгәртелгән транспорт сараларын хужалары уларҙы тейешле хәлгә килтергәнгә тиклем туктатыу һәм тотоу мөмкинлеге ҡарала. Ошо закон проектын әҙерләгәндә был проблемаларҙың сит илдәрҙә нисек хәл ителеүе менән ҡыҙыҡһынғайныҡ, ләкин, үкенескә, бындай тәжрибәләр булмай сыҡты. Илдәге заводтарҙа тауыш кимәлен үлсәү аппараттары етештерелә башлаясаҡ. Хоҡуҡ боҙоуҙарҙы автоматик рәүештә, фото- йә иһә видеокамералар менән берләштерелгән тауыш үлсәгестәр ярҙамында теркәү тәҡдим ителә".

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәҙәниәт, Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау һәм Төҙөләш һәм архитектура министрлыҡтарына: "Быйыл Өфөләге Һаңғырауҙар мәҙәниәт йортон ремонтлауға тотонорға кәрәк. Улар күптән һорай. Һаңғырауҙар федерацияһы әүҙем эшләй", - тип йөкләмә бирҙе.

✔Республиканан "Башҡортостан" полкының хәрби әҙерлек зонаһына 20 машинанан торған ылау юлға сыҡты. Улар килтергән иң ҡиммәтле әйбер - юлһыҙ урындан үтә алыусы техника. Ул яугирҙарға бик кәрәк, тине республика Башлығының хәрбиҙәр менән эш итеү буйынса кәңәшсеһе Алик Камалетдинов. Йөктә Башҡортостандың ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты хеҙмәткәрҙәре оҙатып бара.

✔31 августа тиклем Өфөнөң Салауат Юлаев проспектында хәрәкәт сикләнә, тип хәбәр иттеләр республика Транспорт һәм юл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Ике йүнәлештә лә бер һыҙат буйынса (Октябрь революцияһы юл үткәргесе аҫтында) хәрәкәт итергә мөмкин.

✔Башҡортостандың Төҙөләш һәм архитектура министрлығы 2023 йылдың өсөнсө кварталына бер квадрат метр торлаҡтың уртаса баҙар хаҡын раҫланы - 99 772 һум. Бер квадрат метр торлаҡтың уртаса баҙар хаҡы республикала даими йәшәгән һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандарға субсидияларҙы иҫәпләү өсөн кәрәк. Торлаҡты һатып алыу йәки төҙөү өсөн аҡса федераль һәм республика бюджетынан бүленә.

✔"Башинформ" асыҡлауынса, ЗАГС мәғлүмәт-аналитика порталы Башҡортостанда быйыл тыуған сабыйҙарҙың популяр исемдәрен баҫтырып сығарған. Мәғлүмәттәр 8 августа ҡарата алынды. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ исемдәре араһында София (417), Амелия (416), Әминә (398), Йәсминә (395) һәм Эмилия (390). Ирегет исемдәре араһында Әмир (525), Тимур (409), Марк (393), Артем (389), Мирон (387) өҫтөнлөк итә.

✔"Ред Вингз" авиакомпанияһы аҙнаһына 7 тапҡыр Өфөнән Тбилисиға һәм Кутаисиға халыҡ-ара авиарейстар башҡарыуға рөхсәт алды. Бынан тыш, тағы 3 ай Өфө - Астана ("Азимут" һәм "Ред Вингз" авиакомпаниялары), Өфө - Алматы ("Ред Вингз", "Ютэйр"), Өфө - Анталья ("Ред Вингз"), Өфө - Ташкент ("Ютэйр") авиарейстарын башҡарырға рөхсәт бирелде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Аксаков баҡсаһында тарихи аллея, йәйге амфитеатр, күл яры буйы зонаһы, әҙәби ҡунаҡхана, ваҡиғалар майҙансығы, хәүефһеҙ ябыулы балалар майҙансығы, скейт майҙансығы, асыҡ китапхана, төрлө бәүелсәктәр буласаҡ.*

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# АРҠАЛАР...

## арҡаларға төшмәһен

**Өфөнөң Аксаков исемендәге баҡсаһын яңыртып төҙөү барышында инеү төркөмө арҡаһы ҡутарып ташланған. Ошо турала "Архзащита" активистары хәбәр итте.**







Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте "Башинформ" агентлығына ошо мәғлүмәттең дөрөҫлөгөн раҫлап, һүҙ барған конструкцияны тикшереү һөҙөмтәләренә ярашлы, унық авария хәлендә булыуы хаҡында аныҡлыҡ индерҙе. Тимәк, ошо арка ҡала кешеләренең ғүмеренә һәм һаулығына хәүеф тыуҙырған була.

"Аксаков баҡсаһындағы инеү төркөмөнөң ниндәй хәлдә булыуы барыһына ла билдәле ине, һәм ул һуңғы йылдарҙа граждандар өсөн ҡурҡыныс тыуҙырған объектҡа әйләнде. Шуға күрә авария хәлендә ҡалған арка, кешеләрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында, ябылғайны, ә граждандарға Пушкин урамы яғынан хеҙмәткәрҙәр инеп-сығып йөрөй торған ҡапҡанан йөрөргә тәҡдим ителде. Аксаков исемендәге баҡсаның Үҙәк инеү төркөмө мәҙәни мираҫ объекты булғас, беҙ был мәсьәләнең ниндәй етди икәнен аңлайбыҙ. Махсуслаштырылған ойошма тарафынан тикшерелгәндән һуң объект конструкцияларының авария хәлендә булыуы раҫланды", - тип белдерҙе мэрияның матбуғат хеҙмәте.

Әйтергә кәрәк, конструкция бөтөнләйгә юҡ ителмәйәсәк. Реставрациянан һуң арканы, тәүҙә нисек булған, шул рәүешле тергеҙеү ҡаралған. Эштәрҙе сентябрь аҙағына теүәлләү планлаштырылған. Объект "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Комфортлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проекты сиктәрендә яңыртыла торған йәмәғәт арауыҡтары исемлегенә индерелгән. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәләренең береһендә Башҡортостан Башлығы ҡала хакимиәтенә Өфө ҡалаһының йәмғиәт арауыҡтарындағы барса авария хәлендәге аркаларҙы тәртипкә килтерергә ҡушты. Иҫкергән конструкциялар алып ташланғас, улар урынына тәбиғи таштарҙан яңылары ҡуйыласаҡ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

Өфө хакимиәте Аксаков исемендәге баҡсала урынлаштырылырға тейешле ике арт-объектты ҡуйыусыларҙы билдәләне, улар "Ал сәскә" һәм "Бала саҡ" тип аталасаҡ.

Килешеүҙәр баштан уҡ билдәләнгән максималь хаҡҡа төҙөлгән, объекттарҙың дөйөм хаҡы - 16,8 млн һум. Скульптура композициялары патинланған бронзанан яһалырға һәм сентябрь аҙағына гранит постаменттарға ҡуйылырға тейеш.

"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәр итеүенсә, 2022 йылда ҡалабыҙҙың барса райондарының 10 популяр йәмәғәти биләмәләренән тап Аксаков исемендәге баҡсаны һәм уның тирә-яғын төҙөкләндереү өсөн өфөлөләр иң күп тауыш биргән.

Биләмәне бер нисә функциональ зоналарға бүләсәктәр. Аксаков баҡсаһында тарихи аллея, йәйге амфитеатр, күл яры буйы зонаһы, әҙәби ҡунаҡхана, ваҡиғалар майҙансығы, хәүефһеҙ ябыулы балалар майҙансығы, скейт майҙансығы, асыҡ китапхана, төрлө бәүелсәктәр буласаҡ. Шулай итеп, бында иң бәләкәй балаларҙан алып оло быуын кешеләренә тиклем уңайлы ял мөхите булдырыласаҡ.

Төҙөүселәр шулай уҡ быуаны сүп-сарҙан һәм ылымыҡтан таҙартырға, яр буйын төҙөкләндерергә һәм унда матур эскәмйәләр ҡуйырға вәғәҙә итә. Реконструкция тамамланғас, быуаға аҡҡоштар ебәреләсәк.

# ӘЙҘӘГЕҘ, КИНОҒА!



**Баш ҡалабыҙҙы көньяҡтан һәм көнбайыштан уратып аҡҡан Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярының бер өлөшө тотошлайға бетон менән ҡапланғас, халыҡ үтә лә ғәжәпкә ҡалғайны. Был тере йылғаны таш бығау менән тышап ҡуйған кеүек булды тәүге мәлдәрҙә. Ошондай "йәнһеҙ" мөхиттә ял итергә теләрме икән өфөләр, тип уйларға ла ерлек бар ине.**

Әлбиттә, ошо йәнһеҙлекте йәмләрҙәй объекттар төҙөү кәрәклеген барыһы ла аңлай ине. Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, ошо биләмәне төҙөкләндереү, уның инфраструктураһын формалаштырыу хаҡында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев бер тапҡыр ғына сығыш яһаманы. Ул ошо үҙенсәлекле яр буйының берҙәм архитектура концепцияһын булдырыу зарурлығына баҫым яһап: "Ағиҙел йылғаһы ярын аҡрынлап объекттар менән тултыра барасаҡбыҙ, эштәрҙе ниндәй йүнәлештә һәм нисегерәк алып барыуҙы аңлау ҙа бар хәҙер", - тип асыҡлыҡ индерҙе.

Билдәләнеүенсә, бында бигерәк тә йәмәғәт туҡланыуы, һатыу итеү, күңел асыу зоналарына айырым иғтибар ителәсәк. Үткән аҙнала ғына яр буйында "Дуҫтар" тип аталған аттракциондар паркы эшләй башланы. Йәнә тиҙҙән яр буйына ял итергә килеүселәр саф һауала кино ла ҡарай аласаҡ. Өфө ҡалаһы хакимиәте киноэкран элеү мөмкинлеге һәм тамашасылар өсөн ултырыу урындары булған махсус япма-ҡоролманы йыйыу һәм ҡуйыу буйынса контракт төҙөнө. Кинотеатр модуленең оҙонлоғо - 8,5 м, киңлеге - 6 м, бейеклеге - 5 м. Был объект ҡарағас таҡтасыҡтар менән көпләнгән металл конструкциянан тора. Модулде ҡуйыусы ойошмаға эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн 75 көн ваҡыт кәрәк буласаҡ.

ҠЫҪҠАСА

# ТӨҘӨЛӨШ ЙӘНЛӘНӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бер ай эсендә төҙөлөш документтарын тикшерергә, объекттың торошон баһаларға һәм Әр-Рәхим мәсете мәсьәләһе буйынса оператив штаб ойоштороорға ҡушты.** Был хаҡта Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе Айнур Бирғәлин хәбәр итә. "Барлыҡ бурыстарҙы үтәгәндән һуң Радий Фәрит улы мәсет төҙөлөшөн дауам итеү ҡарары һәм уны тамамлау ваҡыты тураһында шәхсән үҙе иғлан итәсәк", - тип яҙҙы Айнур Бирғәлин. Алдан хәбәр иткәнебеҙсә, Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса июнь башында мәсет төҙөлөшө тергеҙелде. Башҡортостандың Төҙөлөш министрлығы мәғлүмәте буйынса, финанслау тулыһынса меценаттар иҫәбенә башҡарыла. Быйыл март айында көслө ел мәсеттең бер көмбәҙен ауҙарғайны. Яңы көмбәҙ әҙер, ләкин тәүҙә эксперттар башҡа конструкцияларҙың ышаныслы һәм хәүефһеҙ икәнен тикшерергә тейеш.

✓ **Башҡортостанда "Мәғариф" милли проектының "Заманса мәктәп" төбәк проекты сиктәрендә бойомға ашырылған "Ауыл уҡытыусыһы" программаһы еңеүселәре билдәләнде.** Республика Мәғариф министрлығының матбуғат секретары Лина Сарбаева хәбәр итеүенсә, быйыл өс уҡытыусы еңеүсе тип танылған, улар район һәм бәләкәй ҡалаларҙың белем биреү ойошмаларына эшкә урынлашырға теләк белдергән. Башланғыс кластар уҡытыусыһы - Баҡалы районы үҙәгенең 1-се мәктәбенә; математика уҡытыусыһы - Бәләбәй районы Максим Горький исемендәге тоҡомсолоҡ заводының Үҙәк усадьбаһы ауылы мәктәбенә; тағы ла бер башланғыс кластар уҡытыусыһы Бөрө ҡалаһының 9-сы мәктәбенә эшкә төшә."Ауыл уҡытыусыһы" программаһы республикала 2020 йылдан бирле эшләй. Дүрт йыл эсендә 150 уҡытыусы 1 миллион һум аҡса алған. 2024 йылда - программаның һуңғы йылында, ике уҡытыусыға 1 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләнә.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин ирекле батальондар составында махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан граждандарҙың ғүмерен һәм һаулығын мотлаҡ дәүләт страховкалауы тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Указға ярашлы, яугир һәләк булған осраҡта түләнгән страховка суммаһы - яҡынса 3,13 миллион һум, I төркөм инвалидтарына - 2,3 миллион һумдан ашыу, II төркөм инвалидтарына - 1,5 миллион һумдан ашыу, III төркөм инвалидтарына - 783 мең һум. Ауыр яраланған, имгәнгән йәки контузия алған осраҡта түләүҙең күләме - 313 мең һумдан ашыу, ә еңел яраланғанда 78 мең һум самаһы тәшкил итә. Компенсацияны хәрбиҙәрҙең ҡатындары, ата-әсәләре, олатай-өләсәйҙәре, балиғ булмаған балалары һәм 18 йәше тулған инвалид балалары, шулай уҡ башҡа өҫтәмә категориялар алырға мөмкин.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гастрит

❖ Гастритты алма менән дауаларға була, бигерәк тә йәшеле файҙалы. Алмаларҙы әрсеп, ҡырғыстан үткәреп, шунда уҡ ашарға. Бынан 5 сәғәт алда һәм аҙаҡ бер нәмә лә ашап-эсергә ярамай. Төнгөлөккә алма ашарға ярамай. Ауырыуҙың ашҡаҙаны насар эшләһә, баштараҡ һыу менән клизма ҡуйырға кәрәк (тәүге 3-4 көн - көн һайын, аҙаҡ кәрәк саҡта). Эсәктәр ҡуҙғығанда - үҫемлек майы менән. Был рәүешле теүәл бер ваҡытта ҡулланырға. Беренсе айҙа алманы көн һайын ашайҙар, икенсе айҙа аҙнаһына 3 тапҡыр ҙа етә, өсөнсө айҙа - аҙнаһына 1 тапҡыр.

❖ Киҫкен һәм хроник гастриттарҙы дауалау өсөн көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда юл япрағының 1-әр ҡалаҡ һутын эсергә кәрәк. Ҡышҡылыҡҡа яңы әҙерләнгән һутҡа 1:1 нисбәтендә араҡы йәки спирт ҡушып әҙерләргә, йәки киптерелгән юл япрағы төнәтмәһен дә эсергә була. Һуңғыһын әҙерләү өсөн 3 балғалаҡ юл япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 6-8 сәғәт төнәтергә. Уны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 60 грамм эсергә.

❖ Һитә (перга) менән балды 1:1 нисбәтендә ашау эсәктәр эшмәкәрлеген һәм организмдың дөйөм торошон яҡшырта.

❖ 30 процентлы һитә төнәтмәһенең 20 тамсыһын ярты стакан йылы һыуға тамыҙып, ашарҙан 1 сәғәт алда эсергә. Был рәүешле 3 аҙна дауаланырға.

❖ Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда 1-әр стакан һырғанаҡ (облепиха) һуты эсергә.

❖ 250 грамм бал, 0,6 грамм зәйтүн майы, 2 лимон һутын һығып бергә ҡушырға. Ҡатышманы һыуытҡыста быяла һауытта һаҡларға. Ҡулланырҙан алда болғатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 10 процентлы һитә төнәтмәһе һәм һырғанаҡ майын 10:1 нисбәтендә ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда 20-30 тамсыһын һыу йәки һөткә ҡушып эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Кешенең теләгенә һәр ваҡыт ҡаршылыҡтар осрай. Һинең сафлыҡҡа, изгелеккә ынтылышың, уларға өлгәшеү теләгең ни тиклем көслөрәк булһа, һиңә ҡаршылыҡтар ҙа, мәшәҡәттәр ҙә шул тиклем көслөрәк мәшәҡәтләйәсәк.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Ауымбаҡ
**(Краснозобая гагара)**



Эре өйрәк кеүек ҙурлыҡта. Арҡаһында йыраҡтан күренмәгән ваҡ ҡына аҡ таптар бар. Ҡош туйы мәлендә ваҡытлыса муйынының алғы яғында ерән тап барлыҡҡа килә. Суҡышы бөгөлөп тора, шуға ҡош бер аҙ "йәмшек танау" булып күренә. Ҡош туйы ваҡытында "хуэрру, хуэрру" тигән көслө тауыш сығара. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 53-69 см, ҡанаты йәйелгән саҡта 105-120 см.

Төньяҡ Американың төньяғында, Евразияла оя ҡора. Күлдәрҙә, шулай уҡ ҙур булмаған һил һыу ятҡылыҡтарында бер пар айырым йәшәй, ҙур һыу ятҡылығында бер нисә пар йәшәй ала. XX быуаттың 40-сы йылдарына тиклем беҙҙең яҡтарҙа был ҡоштарҙың булыуы хаҡында мәғлүмәт юҡ, унан һуң осоп барышлай туҡтап киткәндәрен генә теркәгәндәр. Үткән быуаттың 50-се йылдарында шулай ҙа Талҡаç күлендә, Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларында йышыраҡ күренә. Бөгөн инде Кама, Ағиҙел йылғалары үҙәнендә, Урал аръяғы күлдәрендә, Түбәнге Кама һыуһаҡлағысында йыл һайын уҡ булмаһа ла, осрай. Ҡышты Каспий һәм Ҡара диңгеҙҙәрҙә ҡышлай.

### Ҡолаҡлы сыпҡай
**(Красношейная поганка)**



Бәләкәй өйрәк һымаҡ ҙурлыҡта. Яҙын һәм йәйен күҙҙәренең өҫтөндә һәм аҫтында тырпайып торған ерән ҡауырыйҙар ҡара төҫтәге башында үҙенсәлекле тап булып күренеп тора. Муйыны, ҡабырғалары ла ерән төҫтә. Суҡышы тура, ҡара төҫлө, осо - аҡ. Башын саҡ ҡына артҡа ташлап йөҙә.

Тауышланып йөрөгән ҡош түгел, әммә туй ваҡытында "юрьрьрь" тигәнерәк сутылдау сығара.

Ҙур булмаған, үлән баҫҡан һыу ятҡылыҡтарын үҙ итә, шулай ҙа күлдәрҙә лә оя ҡора. Беҙ уны Учалы (Ҙур Учалы, Ҡарағайлы), Әбйәлил (Атауҙы, Бурһыҡ, Үләнде, Сыбаркүл) райондары күлдәрендә күргәнебеҙ булды. Айырым парҙар булып та, ҙур булмаған колониялар менән дә йәшәйҙәр. Аҡсарлаҡтар, керелдәктәр йәшәгән урындарҙы һайларға тырышалар. Ояларҙы ылымыҡтарҙан, серегән үҫемлектәрҙән яһай. Инә ҡош 3-4 йомортҡа һала. 22-25 көндән бәпкәләр сыға. Улар урҙан бәпкәләренә оҡшаған, баштары буй һыҙатлы.

Башлыса умыртҡаһыҙҙар менән туҡлана, балыҡ ҡалдыҡтары тикшерелгән ҡоштарҙың береһендә генә осраны. Уларҙың ашҡаҙанында (бүрләтәүме ул?) ҡаурыйҙар менән тулы, улар ризыҡты ваҡлап, гастролит функцияһын үтәй.

Ҡолаҡлы сыпҡай ҡарамуйын сыпҡай һәм урҙанға ҡарағанда һирәгерәк осрай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ШУНДАЙ АҠЫЛ БАР!*

# АТ АУНАҒАН ЕРҘӘ...

## төк ҡала

**Ат хаҡында әйтемдәр күп инде ул. Мәҫәлән, "Ат аунаған ерҙә төк ҡала". Мәғәнәһе менән "Утһыҙ төтөн сыҡмай" тигән әйтемгә лә оҡшаш ул. Ат аунауҙан - төк, ут яныуҙан - төтөн. Сәбәп - һөҙөмтә. Мәғәнә һәлмәклеге һәм оҡшашлығы буйынса был ике әйтемде бер-береһенең варианты, игеҙәге тип әйтергә лә була. Уларҙың "Утһыҙ төтөн сыҡмай" тигәненә килгәндә, кемдер берәү махсус төтәткестәр эшмәкәрлегендә төтөн сыҡһын өсөн ялҡындың мотлаҡ булыуы шарт түгел, тип тә әйтер. Кем белә, бәлки, киреһенсә, төтөнһөҙ ут булмайҙыр? Ә? Тағы ла киң билдәле "Иң тәүҙә йомортҡа булғанмы, әллә тауыҡмы?" тигән дилемма алдына килеп баҫабыҙ. Ғәҙәттә, логиканың ошондай дилемма аталмыш юл сатына килеп сыҡҡанда әңгәмә-бәхәстәр оҙон-оҙаҡҡа һуҙылыусан. Шул саҡта кемдер әйтеп ҡуйыр: һе, тауыҡ бит үҙе лә ҡасандыр йомортҡа эсендә ятҡан.**



Үҙ ғүмерендә һис юғы бер тапҡыр усаҡ тоҡандырып ҡараған кеше шуны ла белмәй ҡалмағандыр: төтөн, ғәҙәттә, усаҡты тоҡандырған саҡта һәм усаҡ янып бөткәс, торонбаштар ҡуҙланып ләүкегәндә сыға башлай. Ошо ябай ғына күренештән ниндәй фәлсәфәүи һығымта яһарға була тип уйлайһығыҙ? Эйе, төтөн дә, ут та бер үк ваҡытта сәбәп тә, һөҙөмтә лә булыуы бар бит. Мәсьәләгә ҡайһы яҡтан ҡараһаң, бер яғында ут беренсел, икенсеһендә төтөн усаҡтың айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелә лә ҡуя. Ә инде "ат аунау" менән "төк ҡалыу" миҫалына килгәндә, төк ҡалыуҙы ат аунауға бер нисек тә сәбәп итеп ҡуйып булмаған кеүек. Әммә был тәү ҡараштан ғына шулай тойола. Хәҙер мәсьәләгә кире яҡтан ҡарайыҡ та, шаҡ ҡатайыҡ: һе, була икән дә! Йәғни, ерҙә төгө ятып ҡалһын өсөн дә аттың аунауы фарыз бит әле. Был осраҡта, күреп торағыҙ, төк ҡалыуы - сәбәпкә, ат аунауы һөҙөмтәгә әүерелә лә китә. Ҡыҙыҡ был логика фәне тигәндәре. Заман хатта логикаһыҙ ҙа ҡайһы бер әйтем-мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен баш-түбән әйләндерә.

Шундай уҡ юл менән "Ат аунаған ерҙә төк ҡала" әйтеменең башҡа варианттарын тикшереп ҡарайыҡ. Варианттарға килгәндә инде, улар бихисап. Әйтәйек, "Хикмәт бар ерҙә михнәт бар", "Шатлыҡ килмәй, ҡайғы китмәй", "Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнысҡы төшә", "Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" һ.б.

-"Хикмәт бар ерҙә михнәт бар" - бында михнәт булһын өсөн дә хикмәтте күреү, татыу тәүшарт. Әгәр ҙә ошо шарт үтәлмәһә, йәғни михнәт булмаһа, хикмәт тә үҙ әһәмиәтен юғалта;

- "Шатлыҡ килмәй, ҡайғы китмәй"- бында шатлыҡтың килеүе ҡайғының китеүенә шарт булған кеүек, ҡайғы китеү маҡсаты ла шатлыҡтың килеүен талап итә;

-"Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнысҡы төшә" - бында ат аунаған ерҙә төк ҡалған кеүек принцип, йәғни юнысҡы төшһөн өсөн дә утын киҫелергә тейешле;

-"Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" - берәү көн күреүҙе маҡсат итеп йәшәй-йәшәй, әммә мандый алмай ҙа, шул саҡ икенсе берәүҙең үлеме уға көн күрергә шарт тыуҙыра, йәғни ул үлгән кешенең урынын, биләгән вазифаһын яулай.

Ҡыҙыҡ ҡына бер риүәйәт. Бер саҡ аҡһаҡал Чжуан-цзының йортона арыуынан бигерәк күңеле урынында булмауынан яфаланған, әлһерәгән, самаһыҙ ябыҡҡан кеше килеп ингән. Йорт хужаһы уның йөҙөнә, төҫөнә, өҫ-башына, һын-һыпатына ҡарап, шундуҡ тегенең кемлеген, ниндәйерәк ғазаптар кисереп йөрөүен тоҫмаллаған.

- Күпме йәшәп, донъяла һинең кеүек балтаһы һыуға төшкән кешене күргәнем юҡ ине әле, - тип ҡаршылаған ул йортоноң тупһаһын аша атлап инеүсене.

Үҙен бер күреүҙән аңлап, күңел торошон тоҫмаллап хәленә инеүсене оҙаҡ эҙләгәндән һуң тапҡандай ҡыуанған мосафир еңел булмаған яҙмышы хаҡында зарланып һөйләргә тотонған.

- Күңелем менән тормош араһында гармония эҙләп, ун ике йыл буйына ер йөҙө буйлап ҡыҙырҙым: донъялағы барлыҡ тауҙарҙың барлыҡ түбәләренә лә артылдым, Елдәр далаларында япа-яңғыҙым дәрүишлек ҡылдым, күп һанлы аҡыл эйәләре менән осрашып һөйләштем. Тик барыһы ла бушҡа ғына булды. Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, кем менән генә осрашһам да, күңел тыныслығы, тойғолар сафлығы, уйҙар аҡлығы таба алманым. Остазым, әйтегеҙсе миңә, рухи таҙарыныу юлдарын һәм ысулдарын эҙләү тигән төшөнсә ялғанмы ни? Юҡмы ни был донъяла изгелек, сафлыҡ, аҡлыҡ тигәндәре? Әллә улар һеҙҙең кеүек аҡыл эйәләренең телендә, хыялында ғына йәшәйме? Һеҙ мин төбәп килгән һуңғы аҡһаҡал, һеҙҙе остаздарҙың остазы тип ишеткәйнем.

Чжуан-цзы мосафирҙы иғтибар менән тыңлап ултырған да, бер бармағын күккә төбәп, байтаҡ ҡына өндәшмәй торғас:

- Күреп торам, улым, һин һәр ваҡыт юлдаһың. Алдыңа алған маҡсатыңа барып етмәйенсә, туҡталып ҡалмайһың икән, - тип һүҙ башлаған остаз. -Шулай булғас, мин һиңә бығаса берәүгә лә әйтмәгән серемде асам. Әгәр ҙә һин ут эҙләйһең икән, уны бары тик төтөнө менән бергә генә таба алаcаҡһың. Ат аунаған ерҙә мотлаҡ рәүештә төк ҡала. Ут менән төтөн, ат менән төк - бер-береһенән айырылғыһыҙ. Әгәр ҙә йылғала сағылған айҙы мәңгелеккә айырылғыһыҙ итеп үҙендеке иткең килһә, һәр ваҡыт үҙең менән бер биҙрә һыу йөрөтөргә бурыслыһың. Кәрәк саҡта биҙрәң эсендәге һыуға күҙ һалып ҡына ебәрәһең дә, ундағы айҙың артынан эйәреп йөрөүенә инанаһың һәм юлыңды дауам итәһең. Шунһыҙ, йылғалағы ай һинеке булмаясаҡ. Тап шуның кеүек, кешенең теләгенә һәр ваҡыт ҡаршылыҡтар осрай. Һинең сафлыҡҡа, изгелеккә ынтылышың, уларға өлгәшеү теләгең ни тиклем көслөрәк булһа, һиңә ҡаршылыҡтар ҙа, мәшәҡәттәр ҙә шул тиклем көслөрәк мәшәҡәтләйәсәк, күберәк тап буласаҡ һәм артабан атларға ҡамасаулаясаҡ, аяғыңа тышау булып һалынасаҡ. Әгәр ҙә һин яҡшылыҡ менән яуызлыҡты, лайыҡлы менән лайыҡһыҙҙы, аҡ менән ҡараны яҡшы айыра белһәң, ул сағында яуызлыҡ, лайыҡһыҙ һәм ҡара төҫ яйлап-яйлап һиңә буйһона башлаясаҡ. Аҡты ҡаранан айыра белеүең һиңә үҙ-үҙең менән идара итеү мөмкинлеге, үҙ-үҙең өҫтөнән хакимлыҡ итә белеү һәләтен бүләк итәсәк. Дошманыңдың күҙенә тура ҡараған саҡта ғына ул үҙенең көсөн юғалта...

Был риүәйәткә һалынған фекер "Ат аунаған ерҙә төк ҡала", "Утһыҙ төтөн сыҡмай" әйтемдәренең мәғәнәһен тағы ла киңерәк итеп асып күрһәтә. Остаздың бигерәк тә "Һинең сафлыҡҡа, изгелеккә ынтылышың, уларға өлгәшеү теләгең ни тиклем көслөрәк булһа, һиңә ҡаршылыҡтар ҙа, мәшәҡәттәр ҙә шул тиклем көслөрәк мәшәҡәтләйәсәк..." тигән һүҙҙәре беҙҙең милли тормошобоҙҙағы бер үҙенсәлекте аңлата ла бирә. Әгәр ҙә сафлыҡҡа, изгелеккә ынтылмаһаҡ, матди байлыҡ ҡына туплауҙы маҡсат итеп ҡуйһаҡ, йәшәүе лә еңелерәк булыр ине. Ат аунаған ерҙә төк ҡала инде ул...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

1

# ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

12-18 август (урағай) 2023 йыл №31 (1073)

ӘЙТӘГҮР!

## БАЙРАМДАР...
### кем өсөн үтә?

**ҺОРАУ: "Баш ҡалабыҙҙа үткәрелгән байрам саралары тураһында йәштәр ниндәй фекерҙә?"**

***Рөстәм АБДРАЗАҠОВ:*** Хәҙерге йәштәр Өфөләге байрам саралары тураһында төрлө фекерҙә: кемдер уларҙы ярата, хатта ойоштороуҙа ҡатнаша, ә кемдер был байрамдарҙы ҡыҙыҡлы тип иҫәпләмәй. Был сараның нисек үткәрелеүенән дә тора. Ҡала байрамдары, форумдары, фестивалдәре күбеһенсә рәсми юҫыҡта ойоштороола бит, шуға ла уларҙа оҙон-оҙаҡ сығыштар, докладтар яңғырай - был, әлбиттә, йәштәргә бик ҡыҙыҡлы түгел.

Шәхсән мин үҙем күберәк театрҙарға йөрөйөм. Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрына һәм Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына өҫтөнлөк бирәм. Шулай уҡ Ҡорбан байрамында, Рамаҙан айы сараларында ҡатнашырға яратам. Беҙ студент йылдарында тиҫтерҙәребеҙҙең ял минуттарын күңелле, файҙалы итеп ойоштороуҙы хәстәрләп, үҙебеҙсә байрамдар, осрашыуҙар ойоштора торғайныҡ. Шулай, 2000 йылдар башында Өфөлә йәшәгән Әбйәлил йәштәре өсөн төрлө саралар - сентябрҙә беренсе курс студенттары өсөн танышыу саралары, Яңы йыл кисәләре, төрлө уйындар, йәйге һабантуйҙар, дискотекалар үткәрә инек. Был сараларҙан һуң бик күп һыра шешәләре, тәмәке төпсөктәре ятып ҡалғаны иҫтә. Ошо хәлде күреп, "Дөрөҫ эшләйбеҙме икән?" тип йыш ҡына хафаланып уйлана торғайныҡ. Әммә йылдар үткәс, бәхеткә күрә, йәштәр айыҡлыҡҡа, сәләмәт тормош алып барыуға ынтыла башланы.

Тураһын әйткәндә, хәҙерге башҡорт йәштәре ҡалыптарға буйһонмай, тормошҡа үҙ ҡараштары менән йәшәргә тырыша. Шуға күрә бөгөн улар байрамдарҙы ла күңелдәренә ятҡан рәүештә үҙҙәре үткәреүҙе гәҙәт итеп алды. Бында дуҫтарым менән бергәләп ойошторған "Самауырлы ритайым"ды миҫал итеп килтерергә мөмкин. Унда ҡыҙҙар селтәрҙәр, егеттәр ситектәр кейеп, бейейырлап, бер-береһе менән аралашып, тәмле сәйҙәр эсеп, рәхәтләнеп күңел асып ҡайта. Ҡалала уҙғарылған байрамдар ҙа шундай уҡ күңелле, ябай, матур, ентекле әҙерләнгән булырға тейеш, тип уйлайым.

***Гөлнара ӘХМӘТОВА:*** Йәш кеше тормошоноң һәр минутын күңелле генә түгел, файҙалы һәм фәһемле итеп үткәрергә тырыша. Байрам ойоштороусылар иң тәүҙә ошоно аңларға тейеш. 2-3 сәғәт буйы концерт ҡарау ялҡыта, шуға күрә байрамдарҙы төрлө викториналар, уйындар, бүләктәр уйнатыу һәм башҡа интерактив саралар менән төрләндереү, хатта төрлө оҫталыҡ дәрестәре, квестар үткәреү яҡшы.

Йәштәр, студенттар Өфөлә уҙғарылған Ҡала көнө, Йәштәр көнө байрамдары сараларының йыл һайын бер төрлө, башлыса рәсми төҫтә үтә икәнен белә, шуға ла уларҙа бик ҡатнашып та бармай. Ә бына Йәш яҡташтар берлеге үткәргән сараларҙа беҙ кинәнеп ҡатнашабыҙ. Был ойошма баш ҡалабыҙҙа егерме район йәштәрен йыйып, төрлө байрамдар әҙерләй. Ағиҙел яры буйында ике аҙнаға бер тапҡыр үткәрелгән "Самауырлы ритайым"ды ла улар ойоштора. Унда 300-ҙән ашыу йәш кеше йыйыла. Шулай уҡ Йәш яҡташтар берлегенең бына нисә йыл рәттән үткәрелеп килгән һәм киң танылыу яулаған "Кош юлы", "Аҫылташ", "Майҙансыҡ" тигән проекттарында йәш быуын әүҙем ҡатнаша, уларҙа һәр кем үҙ һәләтен күрһәтә ала. Ҡыҫҡаса әйткәндә, сараны ойошторғанда уны кем өсөн үткәреүҙе белеү бик мөһим. Әгәр ҙә йәштәрҙе йәлеп итергә кәрәк икән, уларҙы нимә ҡыҙыҡһындыра, йәш быуын буш ваҡытын нисек үткәрергә теләй һәм башҡа һорауҙарға яуап табырға кәрәк.

**Гөлназ ӘХМӘТЙӘНОВА яҙып алды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

## КЕМДЕР КИЛЕН АЛЫП ҠЫУАНДЫ...



**Башҡаларҙан айырылып торһон өсөн Аллаһы Тәғәлә һәр бер халыҡҡа тел, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, хатта кейем биргән, тиелә бер башҡорт риүәйәтендә.**

Милли костюм - мөһим сығанаҡ, ул халҡыбыҙҙың матурлыкты нисек тәрән аңлауын сағылдырып тора. Дәүерҙәр үҙгәреп торһа ла, башҡорт бер ҡасан да үҙ асылынан ситкә китмәгән. Бөгөн дә халҡыбыҙҙың сәнғәт элементтарын ҡулланабыҙ, йолаларыбыҙҙы тотоп йәшәйбеҙ, уларҙы балаларыбыҙға өйрәтәбеҙ.

Һуңғы йылдарҙа иманлы, айыҡлыҡ яҡлы йәштәрҙең, тәүге ғаилә байрамдарын - никах туйҙарын милли стилдә уҙғарырға тырышыуы ҡыуандыра. Милли күлдәктәр былдай байрам тантанаһына айырыуса йәм, зауыҡ, сағыулыҡ өҫтәй.

Бөрйән районында яңыраҡ ошондай матур туй тантанаһы үткән. Ғаилә ҡорған йәштәр - Аҫҡар ҡыҙы Йәнгүзәл һәм Нәби егете Гәзинур Һатыбаловтар никахтарын теркәү тантанаһын Аҫҡарҙа саф һауала уҙғарған. Килен булып төшкән ауылында ҡыҙға Нәби ағинәйҙәре йолаға тура килтереп матур итеп һыу юлы ла күрһәткән. Башҡорт кейемендә тәүге ғаилә байрамдарын билдәләгән йәштәрҙең ғүмерҙәре лә шулай матур, сағыу булһын тип теләйбеҙ.

**Сулпан ҒАРИПОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

## ҮҘГӘРЕШ БУЛЫУЫН ТЕЛӘҺӘҢ,
### үҙеңә үҙгәрергә кәрәк!

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, алҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



***Инсаф ЙӘМИЛЕВ, юрист, шәхси эшҡыуар:*** Йәштәребеҙҙең замандан артта ҡалмаҫҡа, үҫешергә ынтылышы күренә, шулай ҙа бөгөнгө көндә уларҙың ун процент тирәһе генә бирелгән мөмкинлектәр менән файҙаланып, үҙ эшен аса, төрлө яҡлап үҫешә. Ҡалған 90 проценты тормошон ҡырҡа үҙгәртергә батырсылыҡ итмәй, атай-әсәйҙәребеҙ кеүек, бөгөнгө баҙар шарттарында тәғәйенләнгән бер эш хаҡын тото-роҡло алып йәшәй бирә. Ә бит ялланып эшләгән кешеләргә лә өҫтәмә рәүештә үҙенең күңеленә ятҡан эш менән шөғөлләнергә, шунан аҡса алырға мөмкинлектәр бар. Бына ошо юҫыҡта йәштәргә үҙаллы үҫешеү етеңкерәмәй, миңә ҡалһа. Мәҫәлән, баш ҡалалағы төрлө бизнес-клубтар эшенә йәлеп ителгәндәр һирәк арабыҙҙа, мин үҙем ойошторошҡан "Основатели" тигәненә шулай уҡ йәштәр бик ҡатнашып бармай. Ә бит унда аҙна һайын үҙ эшендә уңышҡа өлгәшкән кешеләр менән осрашыуҙар үткәрелә, күп кенә сараларыбыҙ бушлай була. Баштан нимә, ҡасан, ҡайҙа була, тип ҡыҙыҡһынып һорашып та, ваҡыты етһә, килмәүселәр күп. Башҡорт йәштәре генә түгел, бөтәһе лә шулай итә.

Бына мәҫәлән, туризм өлкәһендә үҙ эшеңде асыу өсөн быйыл күпме ярҙам алырға була ине, әлбиттә, хөкүмәт аҡсаһын алғас, ҡуйылған шарттарын да теүәл үтәргә кәрәк инде. Әммә субсидияны тулыһынса үҙләштереп бөтә алмағандар, ғариза биреүселәр бик аҙ булған һәм улары ла беҙҙең халыҡ араһынан түгел. Беҙгә киң фекер йөрөтөү етеңкерәмәй шул. Тирә-яҡта барған хәлдәргә өҫтән күҙ ташлап, донъя картинаны күреп өйрәнергә кәрәк. Был тәү сиратта кешене ураҡан мөхиткә бәйле: тоҙланмаған ҡыярҙы тоҙланғандары араһына һалһаң, ваҡыт үтеү менән ул да тоҙланасаҡ. Шуға үҙеңде үҫешкә, уңышҡа ынтылған кешеләр менән уратып алыу зарур. Башта ундайҙар араһында үҙеңде унайһыҙ тойһаң да, тора-бара бер кемдән дә кәм түгеллегеңде аңларһың.

Үҙ өҫтөңдә эшләү һәм үҫеш тигән блокты япҡас, икенсе блок - сәйәхәт итеү үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә. Сәйәхәт, тигәс тә, был ҡайҙалыр сит илгә, диңгеҙ буйына барып ял итеүҙе генә аңлатмай, ә донъя күреп йөрөү кәрәк. Сәйәхәт иткәндә төрлө кешеләрҙе осратаһың, ерҙәр күрәһең һәм тормошто ныҡыраҡ аңлай, уға ҡарашың үҙгәрә бара.

Йәш кеше өсөн өсөнсө мөһим нәмә - ул иманыңды нығытыу. "Аҡса эшләп кенә бәхетле була алмайһың, рухи үҫешкә лә ынтылырға кәрәк", тигәйне миңә бер ағай. Кемдер үҙен йогала таба, кемдер психологияла, беҙ диндә рухи ныҡлыҡ табабыҙ.

**Иманы ныҡ кешенең башында кәрәкмәгән уйҙары булмай, ул үҙенең был донъяға ни өсөн килеүен һәм ҡайҙа барырын белә. Дин тигәс тә, ул намаҙ уҡыу йәки ураҙа тотоу ғына түгел, ә рухи үҫешкә ынтылыу, хәләл аҡса табыу, ғаиләңде ҡарау, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыу ул.**

Мин бына шундай сәләмәт тормош яҡлы, үҙ өҫтөндә эшләгән, сәйәхәт иткән, рухи үҫешкә ынтылған һәм үҙ өлкәһендә һөнәрсе булған тиҫтерҙәрем менән аралашам һәм ундайҙар күберәк булыуын теләйем. Юғиһә, күптәр "эш-өй" тип йәшәп тик ята, комфорт зонаһынан сығырға баҙнат итмәй һәм мөмкинлектәр менән файҙаланмай. Тормоштарын үҙгәрткеләре килһә лә, бының өсөн нимәләр эшләп ҡарамағандар ҙа юҡ түгел. Үҙ ғүмерең өсөн яуаплылыҡты үҙ ҡулдарыңа алырға, үҙгәреш булыуын теләһәң, үҙеңә үҙгәрергә кәрәк. Йәштәргә, тиҫтерҙәремә бына шуны әйтергә теләйем.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

***✓ Башта ҡыйын буласаҡ, барыһын да һағынаһың һәм ҡайтҡы килә. Әммә шул сикте үтһәң, артабан өйрәнеп тә китәһең һәм яңы таныштар табыла, ҡыҙыҡһыныуҙарың да арта. Кеше бөтә нәмәгә лә өйрәнә, тик ваҡыт ҡына кәрәк.***



# ХАЛҠЫМА НИСЕК

## Үҙебеҙгә ошо һорауҙы

(Башы 1-се биттә).

**Үҙегеҙ уҡыған юғары уҡыу йорто, буласаҡ һөнәрҙәрегеҙ менән таныштырып китһәгеҙ ине. Был һөнәр кешеләре илебеҙҙең хеҙмәт баҙарында талап ителәме һәм киләсәге ниндәй?**

**Ғәзинур:** Мин үҙем Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылынан булам, әлеге көндә Мәскәү политехник университетының икенсе курсын тамамланым, машиналар төҙөү факультетының радиотехника йүнәлешендә белем алам. Микроконтроллерҙарҙы программалау һөнәрен үҙләштерәм, инженер буласаҡмын. Был йүнәлеш хәҙерге көндә бик актуаль иҫәпләнә, сөнки замана техникаһының барыһы ла программалаштырыу талап иткән бәләкәс кенә деталдәрҙән тора, улар менән эш итә белеүселәр илебеҙгә кәрәк. Көндәлектә ҡулланылған техниканың барыһын да йүнәтә, яңырта, камиллаштыра алырға өйрәтәләр беҙҙе. Әлеге көндә ир-егеттәр өсөн бик көнүҙәк һөнәрҙәрҙең береһе, тип ышанислы әйтә алам.

Шуны ла әйтеп үтер кәрәк, мин тәүҙә "Юғары иҡтисад мәктәбе" милли тикшеренеү университетына уҡырға ингәйнем һәм бер йыл белем алдым. Сөнки 11-се синыфта һөнәрҙе һәм вузды Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәһенә ҡарап һайлармын әле, тип алдан уйламай эш иттем. Әммә был дөрөҫ юл булмай сыҡты. Юғары иҡтисад мәктәбендә "Йәшел тулҡын" тигән махсус программа эшләй һәм ике предмет буйынса юғары балл алған абитуриенттарҙы уҡырға алалар. Был вузда баҫым күберәк фәнгә яһала, тикшеренеүҙәр үткәрелә, халыҡтан төрлө һорауҙарға яуаптар алына һәм бала саҡтан ҡул менән тотоп эшләргә, төрлө нәмәне йүнәтергә, көнкүрешкә ҡулайлаштырырға ятҡан миңә былар оҡшаманы. Политехта ғәмәли предметтарға иғтибар күберәк бүленә, бында үҙҙәренең уҙыш командалары бар һәм болидтар конструкциялайҙар, проект эшмәкәрлеге көслө ҡуйылған. Тағы ла шуныһы оҡшай: физик культура дәрестәре уҡытыла һәм унда йыл дауамында йөрөп, күнекмәләр яһап, кәрәкле балдарҙы йыйып ҡына сиректе ябырға мөмкин. Юғары иҡтисад мәктәбендә физик үҫешкә ул тиклем иғтибар бирелмәй ине. Вуз алмаштырғас, бер йылымды бушҡа үткәреп, тиҫтерҙәремдән артта ҡалған һымағыраҡ күренәләр, бәлки. Әммә хәҙер күңелемә ятҡан уҡыу йортонда тормошта кәрәкле һөнәрҙе үҙләштереп йөрөүемә ҡыуанам.

**Урал:** Сығышым менән Баймаҡ ҡалаһынанмын, И.М. Губкин исемендәге Нефть һәм газ Рәсәй дәүләт университетының икенсе курсын тамамланым. Мәғлүмәти хәүефһеҙлек йүнәлешендә белем алам һәм был, әлбиттә, актуаль бөгөнгө көндә. Университетты тамамлағас, IT компанияларҙа, башлыса нефть компанияларының IT бүлектәрендә эшләп була. Был йүнәлештә һөнәр үҙләштереү тураһында мәктәбебеҙҙең сығарылыш уҡыусыһы, Санкт-Петербургта йәшәгән эшҡыуар Сергей Продовиков менән осрашыуҙан һуң уйландым. Уға тиклем юриспруденцияға өҫтөнлөк бирә инем. Әммә киләсәктә мәғлүмәти технологиялар өлкәһе үҫешәсәген күҙаллап, бында информатика буйынса - 90, рус теленән - 86, математиканан - 84, физиканан 76 балл йыйып уҡырға индем. Университетта талаптар ҡаты, тырышып уҡырға, башҡаларҙан артта ҡалмаҫҡа, һәр нәмәгә өлгөрөргә кәрәк. Юғиһә, өлгәшенде күҙ уңынан ысҡындырһаң, уҡыуҙан ҡыуыуҙары ла ихтимал.

**Айҙар:** Мин Өфө егете, милли тикшеренеү Мәскәү дәүләт төҙөлөш университетының бишенсе курсын тамамланым, тағы бер йыл уҡыу ҡалды. Уникаль биналар һәм ҡоролмалар төҙөү факультетында белем алам, инженер-проектлаусы булам. Билдәле булыуынса, төҙөлөштөң бер нисә этабы бар һәм бөтә эш башта проектлауҙан башлана, шунан проектҡа документтар әҙерләнә, артабан инде бойомға ашырыу - төҙөлөш-монтаж эштәре, бинаны ҡулланыуға тапшырыу. Бына шуларҙы күҙ уңында тотоп, үҙемдең һәләттәремде эштең ҡайһы өлөшөндә яҡшыраҡ күрһәтә алырымды уйлап, кешеләр менән аралашыу, эште ойоштороу, төҙөлөш-монтаж эштәрендә берлектә эшләгән проектлаусы һөнәрен һайланым. Әлеге көндә башланғыс аҡса күп талап ителмәгән ремонт өлкәһендә үҙ эшемде астым, Мәскәүҙә фатирҙар йыһазлайым. Бәлки, киләсәктә ҙур төҙөлөш компанияһына тиклем үҫеп етә алырбыҙ. Ғөмүмән, Мәскәү - мөмкинлектәр ҡалаһы, унда үҙеңдең һәләттәреңде төрлө яҡтан үҫтерергә була, теләк һәм тырышлыҡ ҡына кәрәк. Ә инде төҙөлөш, уға бәйле һөнәрҙәргә килгәндә, был кешелек менән бергә үҫешкән иң боронғо өлкәләрҙең береһе һәм уның киләсәге яҡты.

**Һеҙ йәмғиәткә лә файҙалы, үҙегеҙҙең дә күңелдәргә ятҡан һөнәрҙәр һайлағанһығыҙ, бик мәслихәт. Әммә бөгөн һеҙҙең тиҫтерҙәр менән әңгәмәләшкәндә, мәҫәлән, күптәре "блогер" һөнәрен үҙләштерергә теләк белдереүен әйтә, был турала фекерҙәрегеҙ ниндәй булыр?**

**Айҙар:** Һәр быуындың үҙенсәлеге булалыр. Бына минең бала саҡ интернеттың ул тиклем массовый ҡулланылышҡа ингән осорона тура килмәне, двд-дисктарҙы ла күреп өлгөрҙөм. Ә бөгөнгө балалар тыумыштан ҡулдарындағы телефонда интернет мөмкинлектәрен ирекле ҡулланып, башҡа төрлө булыу ихтималлығын белмәй ҙә үҫкәндәр. Шуға ла заманса яңы һөнәрҙәр рәтенә тиҙҙән "блогерлыҡ"ты ла индерһәләр, аптырарлыҡ түгел. Мәҫәлән, хатта киберспортсылар бар бит. Был тәбиғи күренеш, уға проблема итеп ҡарарға кәрәкмәй. Блогерҙарҙың күбеһе йәмғиәткә, кешелеккә файҙалы эш атҡармайҙыр, бәлки. Әммә бөгөн күңел асыу индустрияһы ла бик ҙур урын алып тора, кешенең социаль тормошо интернет селтәренә күсә: күрешеп, ҡапма-ҡаршы ултырып һөйләшеүҙәр ҙә һирәгәйҙе бит. Шуға киләсәктә блогерлыҡҡа уҡытыуҙар ҙа булырға мөмкин, тик беҙҙең һымаҡ йылдар буйы белем алмаҫтар, ҡыҫҡа ғына курстар үтерҙәр, моғайын.

**Ғәзинур:** Блогерлыҡтың популяр булыуын тормошобоҙ еңеләйеүе, кешенең эштә мәшғүл ваҡыты йылдан-йыл кәмеүе менән аңлатырға була. Әйтәйек, бер быуат элек кенә кеше көнөнә 15 сәғәт эшләһә, хәҙер иң күбе 8 сәғәт, кемдәрҙер 4-5 сәғәт эшләй. Кәмендә 7 сәғәт ваҡыт бушай, уны ҡайҙа итәһең? Телефонға тексәйәһең инде. Хәҙер бит күршеләрҙе лә белеү мотлаҡ түгел, мин дә ятаҡта ҡаршыла кемдәр йәшәгәнен белмәйем. Ихтыяж булғас, тәҡдим дә тыуа һәм көндәр буйы үҙен төшөрөп, интернет селтәрҙәренә һалған кешеләр һаны арта. Әммә, минеңсә, блогерлыҡ өҫтәмә шөғөл генә булырға тейеш, уны һөнәрең итеү ышанислы түгел һымаҡ, мин тормошта кәрәкле һөнәргә эйә булыу яҡлы. Берҙән, юғары уҡыу йортонда белем алыу мөмкинлеге бушлай бирелә. Икенсенән, кеше ғүмерендә үҙ ҡулдары менән нимәлер тыуҙырырға, барлыҡҡа килтерергә тырыша, уға шулай кәрәк һымаҡ. Ғалимдар асыштар яһай, инженерҙар төҙөй, патенттар ала, редакция хеҙмәткәрҙәре гәзит-журналдар сығара, режиссерҙар фильмдар төшөрә һәм тарихта ҡаласаҡтар. Ә блогерҙарға ҡарата быны күҙ алдына килтереүе ауыр, эштәренең һөҙөмтәһе юҡ һымаҡ.

**Урал:** Ғәзинур менән килешәм. Блогер булаһың икән, файҙалы контент тыуҙыр. Мәҫәлән, фәндәргә, тормошта кәрәк булған оҫталыҡтарға, халыҡтарҙың йолаларына һәм телдәргә арналған блогтар алып бар. Бына Ғәлийән Сынбулатов башҡортса йыһан тураһында, физика фәнен аңлатып һөйләй һәм был ҡыҙыҡ та, файҙалы ла. Әлбиттә, мәғлүмәти "сүп-сар" күп булған осорҙа йәшәгән беҙҙең быуын өсөн блогерҙар үҙенә күрә бер "иләк" функцияһын да үтәй, кәрәкле мәғлүмәтте һөҙөп кенә еткерә. Кеше ваҡытын әрәмгә үткәрмәҫ өсөн, ниндәйҙер ҡыҙыҡһындырған өлкәлә үҙенсә бына шундай кәрәкле тип тапҡан мәғлүмәттәрҙе белеп торор өсөн ҡарай уларҙы. Блогерлыҡ өҫтәмә шөғөл булырға һәм төп эшеңә зыян килтермәҫкә тейеш, тип иҫәпләйем. Сөнки был эш тотороҡло түгел, ваҡытың булһа, шөғөлләнә, булмаһа - юҡ.

**Киләсәк һөнәрҙәре тураһында әйткәндә, ниндәй кадрҙар кәрәк буласаҡ тип уйлайһығыҙ?**

**Ғәзинур:** Әле донъяла күп нәмәне автоматлаштырырға, яҡшыртырға кәрәк һәм шуға программистар, инженерҙарға ихтыяж буласаҡ. Әйтәйек, ҡайһы бер илдәрҙә пилотһыҙ машиналар йөрөй, ә Рәсәйҙә шуларҙы төҙөгән компаниялар ҙа, белгестәр ҙә юҡ. Был йүнәлештәрҙә яңы эш аса алырҙай ҡыйыу, башлы кешеләр ҙә талап ителәсәк. Ярҙам ҡулы һуҙырға теләгән байҙар барҙыр ҙа, тик бының менән файҙалана алырлыҡ аҡыллы, үҙ эшенең белгесе булған оҫталар булырға тейеш. Мәҫәлән, Өфөнө ҡыш ҡарҙан тиҙ таҙартыу ысулын уйлап тапһа, йәки еңелерәк, тиҙерәк һәм сифатлыраҡ юлдар һалыу технологияһын, көнкүреш шарттарын яҡшыртыусы автомат әйберҙәрен эшләһә ине берәйһе. Илде алдынғы сафтарға сығарыусы, үҫешкә алып барыусы кадрҙар талап ителәсәк. Һәм әлеге лә баяғы, күңел асыу өлкәһендәге мөмкинлектәрҙе ҡарарға кәрәк: кешегә буш ваҡытын аҡсаға әйләндереү юлдары күбәйә.

**Айҙар:** Иң перспективалы белгестәр бөгөн яһалма интеллект өлкәһендә эшләүселәр. Был асыҡ һиҙелә, кешелек яһалма интеллектҡа ҙур өмөттәр бағлай һәм әле иң аҡыллы кешеләр ошо өлкәлә эшләй. Бынан тыш, донъяла валюта тураһында күҙаллауҙар ҙа үҙгәреш кисерә, беҙ белгән традицион аҡсаларҙы криптовалюта ҡыҫырыҡлай һәм уны тулыһынса аңлап етмәйбеҙ әле. Кешелек яңы тормош тәртибенә күсә бара кеүек һәм тағы 5-10 йылдан ниҙәр булырын аныҡ ҡына күҙаллап булмай. Көнбайыш һаман да тенденциялар тыуҙыра, әммә Ҡытай ҙа йылдам үҫешә, ә Рәсәйҙең үҙ үҫеш юлы бар, тип иҫәпләй күптәр. Шулай ҙа энергетика өлкәһендә углеводородтан баш тартыу, башҡа энергия сығанаҡтары табылыуы күренә, автомобиль етештереүселәр ҙә быға яраҡлашырға ынтылыуы һиҙелә. Бына шундай шарттарҙа дөрөҫ йүнәлеш һайларға тура киләсәк йәштәргә.

**Урал:** IT өлкәһе белгестәре, уҡытыусылар, табиптар кәрәк буласаҡ, һис шикһеҙ. Ә бына социаль өлкәгә ҡағылышлы һөнәрҙәр юҡҡа сығыуы ихтимал. Тәү сиратта таксистар, официанттар, юристар кәрәк булмаҫ. Һуңғыларына килгәндә, әле үк махсус программалар эшләнгән. Ҡытайҙа яһалма интеллект судья бар, ул суд ҡарарҙары сығара. Әлбиттә, хоҡуҡ яҡлау өлкәһенең бар тармаҡтарын да яһалма интеллект ҡарамағына ҡалдырып ҡуйып булмаясаҡ, был дөрөҫ тә түгел: судтың иң төп принциптарының береһе - кешелеклек юҡҡа сығасаҡ. Әммә бөгөн беҙгә юл ҡағиҙәләрен боҙған өсөн автомат рәүештә штраф киләме - килә. Тимәк, ҡайһы бер осраҡтарҙа махсус программалар ярҙамында йәйләргә була. Яһалма интеллект алыҫ хыял ғына тип уйлаһаҡ та, ул күптән көнкүрешебеҙгә ингән.

**Илдең баш ҡалаһына уҡырға инеүе - бер, унда йәшәп тә китергә кәрәк бит әле. Йәш кешегә бында ныҡынып китеү өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк?**

***Әйткән һүҙеңдә тора белергә кәрәк. Мәскәүҙә эшлекле мөнәсәбәттәр күп төҙөлә, шуға һәр нәмәгә ҙур яуаплылыҡ менән ҡарағанда үҙеңде күрһәтә алаһың. Эске тәртип тә бик мөһим. Һинең алдыңда асылған мөмкинлектәр менән файҙаланып ҡалырға тырышырға кәрәк. Берәйһе: "Эшләп ҡарағың килмәйме?" - тип тәҡдим итһә, мотлаҡ ошоға тотонорға. Шул саҡта үҙ юлыңды таба, баш ҡалала үҙ кеше булып китә алырһың. Барлыҡ сиктәр башыбыҙҙа ғына, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Ятып ҡалғансы, атып ҡалырға кәрәк.***

**Ғәзинур:** Эйе, уртансы синыфтарҙан уҡ Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыған һәм бер ни тиклем үҙаллылыҡҡа күнеккән миңә лә тәүге өс ай тирәһе бик ауыр булды. Түҙемлек кәрәктер, тим. Башта ҡыйын буласаҡ, барыһын да һағынаһың һәм ҡайтҡы килә. Әммә шул сикте үтһәң, артабан өйрәнеп тә китәһең һәм яңы таныштар табыла, ҡыҙыҡһыныуҙарың да арта. Ғөмүмән, кеше бөтә нәмәгә лә өйрәнә, тик ваҡыт ҡына кәрәк. Бынан тыш, ҡайтып нимә эшләйһең? Тегендә зиһененде киңәйтәһең, тәжрибә туплайһың, яңы ынтылыштар булдыраһың, шөғөлдәрең һәм оҫталыҡтарың арта, белем алаһың һәм Мәскәүҙең шәп темпына яйлап күнегәһең. Бынан тыш, уҡыған, тырышҡан бер студентты ла ҡыуғандарын күргәнем юҡ ошоға тиклем. Пунктуаль, яуаплы һәм эшләргә әҙер икәнһең - донъялағы 90 процент кешенән күберәк уңыш ҡаҙанасаҡһың. Башҡаларҙы ғына түгел, үҙ-үҙеңде лә алдамаҫҡа, биргән һүҙеңдә торорға

кәрәк. Бөгөн ошо китапты уҡыйым тинең икән, уҡы.

**Айҙар:** Башта ауырҙыр ҙа, әммә был кешене сыныҡтыра ғына бит. Малайҙар тураһында әйтә алам: атай-әсәйҙән айырылып, үҙ проблемаларын үҙе хәл итеп йәшәргә өйрәнеү, һис шикһеҙ, файҙалы. Улар көнкүрешенә бәйле төрлө мәсьәләләрҙе үҙе хәл итергә лә, кеше менән уртаҡ тел табырға ла өйрәнә. Беренсе курсҡа килгәндәр оялсан, баҙнатһыҙ ғына булһалар, дүртенсе йылға асылып китәләр, үҙ-үҙен тотоштары үҙгәрә. Уҡып бөтөп, эшкә урынлашҡандарҙың холҡо бөтөнләй башҡаса, амбициялары һиҙелә башлай. Әйткәндәй, ҡайҙа йөрөһәк тә, беҙҙең башҡорт егеттәреҡыҙҙары бигерәк тыйнаҡ, баҫалҡы булыуыбыҙ менән айырылып торабыҙ. Ҡайһы бер осраҡтарҙа был сифаттарҙы ситкәрәк ҡуйып, ҡыйыуыраҡ та булырға кәрәктер.

**Урал:** Әйткән һүҙеңдә тора белергә кәрәк. Мәскәүҙә эшлекле мөнәсәбәттәр күп тәңгә, шуға һәр нәмәгә ҙур яуаплылыҡ менән ҡарағанда үҙеңде күрһәтә алаһың. Эске тәртип тә бик мөир-егеткә хас сифаттар түгел былар.

**Урал:** Тәмәке тартмаған, айыҡ тормош алып барған, спорт менән шөғөлләнгән, үҙенең милли йолаларын тотҡан, шәжәрәһен белгән, ата-әсәһен һәм өлкән туғандарын хөрмәт иткән, дуҫтарына тоғро, һүҙен тота белгән, мәҙәниле, интеллигент кеше һәм төрлө яҡлап үҫешкән, бер урында туҡтап ҡалмаған - бына ниндәй сифаттарға эйә ысын ир-егет. Шундай булырға ынтылырға кәрәк һәм өлгөнө замандаштарыбыҙҙан, тарихи шәхестәрҙән алырға була.

**Йәштәр араһында үҫешкә көйләгән, төпкөл аң менән эш итергә өйрәткән, ынтылыш биргән әҙәбиәт бик популяр булып китте. Һеҙ бындай китаптарҙы уҡыйһығыҙмы һәм башҡорт йәштәренең булмышына тап килерҙәйҙәре бармы?**

**Айҙар:** Ундай әҙәбиәт менән 1-2 курста уҡыған саҡта мин дә мауыҡҡан алдым. Күптәр шулай итеүҙең сәбәбен кеше үҙен борсоған мәсьәләләрҙе тиҙ генә хәл итергә теләүҙә, ә был китаптарҙа ҙәр "күберәк сарыф иткән һайын, күберәк килә" тигәнгә бик ышана. Бәлки, ҡайһы бер осраҡта шулайҙыр, ниндәйҙер бер гений аҡсаһы бөтөнләй булмаған саҡта ғына эшләп таба алалыр. Әммә дөйөм алғанда, был бик дөрөҫ фекер түгел, финанс грамотаң булмағанлыҡтан, гел аҡсаһыҙ ултырыу ул. Бына шундай яңылышыуҙарға килтермәһен өсөн һәр нәмәгә тәнҡит күҙлегенән сығып ҡарау мөһим.

**Урал:** Ә минеңсә, бөгөн бындай китаптарҙы уҡыуҙың мәғәнәһе лә юҡ. "Инфосиғанлыҡ" популяр, "мәғлүмәт сиғандары" бындай әҙәбиәттә яҙылғандарҙы барыһын да видеоформатта күпләп тарата. Ғәзинур менән мин уҡыу буйынса кәрәкле китаптарҙы күп уҡыйбыҙ, художестволы әҙәбиәткә ваҡыт бик ҡалмай, шулай ҙа йылына бер нисә китап уҡырға тырышам.

**Илһөйәрлек бик актуаль темаларҙың береһе бөгөн. Һеҙ илһөйәрме һәм был низә сағыла?**

**Ғәзинур:** Эйе, үҙемде илһөйәр тип иҫәпләйем. Был хатта башҡа милләт кешеләренә исемемойоштораБыҙ. Унда ҡатнашҡан ҡыҙҙар ике ай дауамында төрлө оҫталыҡ дәрестәрендә шөғөлләнә, һәр яҡлап һөләттәрен үҫтерә ала. Беҙҙең, йәштәрҙең, был әүҙемлектәрен күтәрмәләп торған өлкән быуын яҡташтарыбыҙ бар, уларҙың ярҙамы ҙур.

**Айҙар:** Эйе, Мәскәүҙә "Илһам" театры, "Алтынай" бейеү ансамбле әүҙем эшләй. Төрлө университеттарҙа халыҡтар дуҫлығына, милли байрамдарға арналған саралар йәки осрашыуҙар булғанда барып, бейеп ҡайтабыҙ. Берлектең баскетбол, футбол һәм башҡа спорт төрҙәре буйынса клубтары бар, ярыштар үткәреп торабыҙ. Ғөмүмән, кем ниндәй матур башланғыс менән сыҡһа ла, күтәрмәләргә тырышабыҙ.

Ә инде илһөйәрлек тойғоһо тураһында әйткәндә, шәхсән мин космополит түгел. Кемдәрҙер яраҡлашып китеп, бәлки, үҙҙәрен бер генә милләт вәкиле итеп һиҙмәй, дөйөм ил вәкиле итеп тоялыр. Ундайҙар беҙҙең кеүек "Халҡыма нисек файҙа килтерәйем икән?" тигән һорауҙы үҙенә бирмәй. Ошо һорауҙы үҙебеҙгә бирергә кәрәк, илһөкем уҙарған йөрөмөүе үк күнелгә яткан күренеш. Халыҡ трамвайҙарҙың да яңырыуын көтә икәнен беләбеҙ. Мин тыуған ҡаламды һағынып ҡайтҡан һайын аэропорттың да даими матурая, халыҡ өсөн уңайлыраҡ була барыуын күрәм. Өфө Мәскәү кеүек етеҙ аҙымдар менән үҫешмәһә лә, үҙ яйына тик яҡшы яҡҡа ғына үҙгәрә бара. Ситтә йөрөгәндә лә Өфөнө белгән төрлө тараф кешеләре уның матурлығын, йәшеллеген маҡтап телгә ала. Шуға уның архитектура, ҡала төҙөлөшө проекттарын дөрөҫ планлаштырып үҫтергән осраҡта һөҙөмтәһе бик шәп буласағына ышанам.

**Урал:** Беҙҙең Баймаҡ районында юлһыҙлыҡ халыҡты һәр саҡ борсоған мәсьәләләрҙең береһе. Быйыл районда асфальт-бетон заводы төҙөлә башлаған, был төбәктәге юлдарҙы рәтләүгә булышлыҡ итер, тип өмөтләнәбеҙ. Мәскәүҙә бөтә юлдарҙы йыл да яңыртып, алмаштырып тороуҙарын күреп йөрөгәс, һәр ваҡыт бында ҡайтҡанда шуға иғтибар итәлә шул.

**Ғәзинур:** Ә шулай ҙа Мәскәүҙә лә уңайһыҙлыҡтар етерлек бит.

# ФАЙҘА КИЛТЕРӘЙЕМ?

## биреп йәшәйбеҙ

һим. Һинең алдында асылған мөмкинлектәр менән файҙаланып ҡалырға тырышырға кәрәк. Берәйһе: "Эшләп ҡарағың килмәйме?" - тип тәҡдим итһә, мотлаҡ ошоға тотоноорға. Шул саҡта үҙ юлыңды таба, баш ҡалала үҙ кеше булып китә алырһың. Барлыҡ сиктәр башыбыҙҙа ғына, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Ятып ҡалғансы, атып ҡалырға кәрәк.

**Әйткәндәй, һүҙеңдә тора алыу - ысын ир-егеткә хас сифат тип беләбеҙ. Һеҙҙеңсә, ысын ир-егет ниндәй һәм йәштәштәрегеҙҙә шул сифаттар бармы?**

**Ғәзинур:** Ысын ир-егет - тыныс, һапалы холоҡло, ғаиләһен ҡараған, буштан-бушҡа конфликттарға инмәгән, тәрән аҡыллы кеше тип иҫәпләйем. Ә яуаплылыҡҡа мин үҙ тәжрибәмдә өйрәндем. Бындай тәртиптәрбиә мәсьәләләре ғаиләнән килә һәм бөгөн беҙҙең башҡорт ғаиләләрендә, айырыуса ауылдарҙа, атайҙарҙың ситкә китеп эшләүе оло проблема булып тора. Малайҙар үҫкән ваҡытта ир кеше ниндәй булырға тейешлеген күрһәтеүселәр юҡ, күптәр әсәйҙәре тәрбиәһендә. Шуға, бәлки, ҡайһы бер сифаттарҙы ла улар үҙендә тәрбиәләй алмай.

**Айҙар:** Хәҙерге егеттәрҙең бөтәһендә лә инфантиллек сағыла, өлкәнәйгәс тә индәренә яуаплылыҡ алыр һәм ҡабул итеп ҡарарҙарының әҙемтәһе өсөн яуап бирер хәлдә түгелдәр. Шулай уҡ көслө заттың ҡыҙҙар кеүек нескә булып күренергә ынтылыуы, бының ҡиәфәттәрендә һәм үҙ-үҙҙәрен тотоонда сағылыуы оҡшап етмәй. Ысын шуның юлдары еңел һәм барыһына ла аңлайышлы тел менән яҙылған кеүек булыуҙа күрәм. Әммә шәхсән үҙем өсөн борсоған һорауҙарға тиҙ яуап таба алманым. Хатта бер ваҡыт маҡсаттарымды билдәләп, шуларҙы яҙып ҡуйып, гел уйлап, күҙ алдына килтереп тә ҡараным һәм күптәре бойомға ла ашты ул. Тик был минең күҙ алдына килтергән өсөнмө, әллә үҙем тырышып, бар көсөмдө һалып эшләгәнгәме? Аныҡ яуап биреүе ҡыйын, һәр хәлдә, хәҙер ундай китаптарҙы уҡымайым, уйландыра, фәһем бирә торған художестволы әҙәбиәткә ҡүстем. Теодор Драйзерҙың "Трилогия желаний", Генри Киссинджерҙың "Мировой порядок" китаптарын ҡабат уҡыйым әле. Кешегә мөхит ҙур йоғонто яһай, конкурентлы мөхиттә маҡсаттар ҡуйып, һөҙөмтәләргә өлгәшеүгә ынтылыш тыуа. Мин шундай һәйбәт мөхиттә үҫтем, Өфө дәүләт авиация техник университеты эргәһендәге лицейҙа уҡыным. Кемдәндер уңышын ҡабатларға тырышыу ахмаҡлыҡ, һәр кемден үҙ юлы.

**Ғәзинур:** Гимназист булғанда уҡыштарҙым, әммә бындай китаптарҙың күбеһе тырышып эшләргә, әҙерәк ял итергә, әҙерәк йоҡларға, һөҙөмтәлерәк эшләргә тигән фекерҙәрҙе төрлө һүҙҙәр, ысулдар менән еткереүен аңлап, ташланым. Бында бер ниндәй ҙә оло сер йәшеренмәгән, тик дөрөҫ юлда булыуыңды тикшереп ҡарарға һәм алға барырға кәрәк. Әлбиттә, мотивация китап әтәргес көс бирһә, яҡшы. Шулай ҙа һәр яҙылған һүҙгә ышанып та бармаҫҡа кәрәк. Мәҫәлән, ҡайһы берәүде боҙмайса матур итеп әйтергә өйрәтергә йыбанмауымда ла сағылалыр ул. Ҡайһы берәүҙәр кеүек, үҙ исемем урынына русса берәй төрлө алмаштырып әйтеп ҡуймайым. Шаярмайса әйткәндә, Башҡортостанымды яратып ҡайтыуымда, туған башҡорт телемдә матур итеп һөйләшеүемдә сағылалыр илһөйәрлегем. Бәлки, киләсәктә эштәремдә лә сағылыш табыр. Ғөмүмән, Мәскәүҙә уҡыған һәм йәшәгән, Башҡортостан студенттары һәм аспиранттарының Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы берлегенә йөрөгән, ойоштороу эштәрендә ҡатнашҡан һәр кемебеҙ илһөйәр, телһөйәр ул. Унда беҙ кем ҡайһы өлкәлә белем алыуына, һәләттәренә ҡарап, сараларҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. Мин "Артылыш" йәштәр майҙансығына ихлас йөрөйөм, унда Мәскәүҙең теләһә ниндәй майҙансығында үҙебеҙҙең башҡорт моңон яңғыратып, йыйылышабыҙ. Хатта Ҡыҙыл майҙанда ла башҡортса йырлап ултырғаныбыҙ бар.

**Урал:** Ғөмүмән, төрлө сараларҙы күп ойоштораБыҙ һәм илебеҙҙең төп ҡалаларында Башҡортостанды яҡшы яҡтан танытырға тырышабыҙ. Ҡайсаҡ Мәскәү халҡы ла килә һәм бик оҡшатып, хайран ҡалып ҡайталар. Башҡорт йәштәрен уҡырға килгәндән алып үҙ эргәбеҙгә туплар, бер-беребеҙ менән танышып, бәйләнештәр булдырыр өсөн көҙгөһөн "Башперваш" үткәрәбеҙ. Былтыр 80-го яҡын беренсе курс студенты "Зарадье" паркында квест һынаууҙарын үтте, РФ Президентының тулы хоҡуҡлы вәкилле-генән килгән, баш ҡала күптән йәшәгән яҡташтар менән танышытылар, аралаштылар. Төрлө форумдар ҙа уҙғарып торабыҙ, "Мәскәү һылыуҡайы" конкурсын бик киң масштабта йәрлегебеҙ халҡыбыҙҙың киләсәген ҡайғыртыуҙа сағылырға тейеш. Бөгөн беҙ ошо маҡсатта ҡулыбыҙҙан килгәнде эшләргә тырышабыҙ, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында уҡыған, эшләгән яҡташтарыбыҙ менән берлектә республикабыҙға, халҡыбыҙға файҙа килтерерҙәй кадрҙар тәрбиәләүҙең мөһимлеген аңлайбыҙ.

**Башҡортостан һәм Өфөгә ҡайтып тораһығыҙҙыр, күңелегеҙгә яткан һәм борсоған яңылыҡтар, үҙгәрештәр бармы?**

**Айҙар:** Һуңғы бер нисә йылда булған яңылыҡтарҙан - тышҡы йөҙө танымаслыҡ булып үҙгәртелгән Совет майҙаны һәм генерал-майор Миңлеғәли Шаймуратов һәйкәле бигерәк оҡшай. Был урындың хәҙер тартыу көсө күпкә артты. Тағы ла Өфөлә күп ҡатлы бейек йорттар һаны артыуы, уларҙы кирбестән генә түгел, заманса материалдар ҡулланып та төҙөүҙәре күренә. Ғөмүмән, бында төҙөлөшкә мөнәсәбәттәр үҙгәрә: элек айырым-айырым урындарға бер бейек башня төҙөп ҡуйһалар, хәҙер торлаҡ комплексы эшләйҙәр. Был иһә, ҡала халҡының йәшәү шарттарын яҡшыртырға, бөтә уңайлыҡтар булдырырға ынтылалар тигәнде аңлата.

Шулай ҙа ҡайһы бер осраҡтарҙа төҙөлөш барған урындарҙа тотош урамдарҙы ябып, транспорт хәрәкәтен туҡтатып ҡуйыуҙары бер аҙ оҡшап етмәй. Был йәһәттән Мәскәүҙә эште йәйәүлеләргә лә, транспорт хужаларына ла уңайлы итеп ойоштора беләләр.

Ә инде ҡалабыҙҙың автобустар паркы яңыртылыуы һөйөндөрә. Бының уңайлымы-юҡмы икәнен тулыһынса баһалай алмайым, әммә иҫке "пазиктар" Мәҫәлән, һаулығыңа бәйле берәй һорауың менән табипҡа ике айй алдан яҙылырға кәрәк. Мин йыш ҡына тәғәйен көндө көтөп йөрөп, онотам һәм саҡ ҡына һуңлап барһам да ҡабул итмәй ҙә ҡуялар. Ә бына Баймаҡ дауаханаһында бер көн эсендә тулыһынса тикшерелеп ҡайтырға мөмкин, исмаһам.

Өфө тураһында әйткәндә, йәмәғәт транспорты эшен көйләүҙе дауам итергә кәрәк. Бәлки, Черниковка, Һупайлы һәм "Йәшел саукалыҡ" яғын үҙәк менән тоташтырған ер өҫтө электричкаһы кәрәктер бында. Ул тәүлек әйләнәһенә эшләһә, етмәһә! Юғиһә, шәхси транспорты булмаған кешегә бында ҡаланың бер осонан икенсеһенә барып етеүе еңелдән түгел. Ә инде ҡарҙан таҙартыу мәсьәләһе ҡар иретеү полигондары төҙөү менән хәл ителер, моғайын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Егеттәр менән Башҡортостан юғары уҡыу йорттарында ла яҡшы шарттар булдырырға ынтылыуҙары, ситкә китеп белем алыу-алмау мәсьәләләре буйынса ла фекер алыштыҡ. Улар башҡорт йәштәре лә ҙур тиҙлек менән үҙгәргән тормош шарттарында конкурентлыҡҡа һәләтле булһын өсөн илебеҙ үҙәгендә уҡырға тейеш, әммә ҡайҙа ғына йөрөһәң дә, яҡташтарың менән бәйләнештәрҙе өҙмә, Кесе Ватаның һәм туған телеңде онотма, тигән ҡараште. Ә был ғаиләнән килгән тәрбиәнән тора, тип тә ҡат-ҡат һыҙыҡ өҫтөнә алдылар. Бына шулай, тиҫтерҙәренә лә, өлкәндәргә лә өлгө күрһәтерҙәй, йөрәктәренә ғәм, маҡсат һалырҙай йәштәребеҙ барлығына ҡыуаныс кисерҙек был осрашыуҙан.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

✓ ***"Атайҙар һәм балалар" темаһына йыш ҡына һүҙ йөрөтөп алырға яратам. Кем - нисек, әммә мин һәр саҡ хәҙерге быуын хаҡында: "Бөгөнгө йәштәребеҙ - бына тигән!" тип кенә әйткем килә.***



*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТАЯНЫУ НӨКТӘҺЕҘ ИТМӘГЕҘ!

**Башҡортостан юлдаш каналында элегерәк "Арыҫландар клубы" тигән тапшырыу була һәм журналист Уйылдан Фәлин алып барған ҡорҙа ир-егеттәр төрлө темаға бәхәс ҡора торғайны.**

...Бына ике билдәле генә шәхес ғаиләлә ҡатын һәм ир мөнәсәбәттәре тураһында фекер алыша. Тик һөйләшеү килеп сыҡманы. Егеттәр алып барыусы ҡуйған һорауҙарға яуап бирә, үҙ ғаиләләренән бер ниндәй ҙә миҫал килтерә алмай ҡаушап ҡалдылар. Уларҙы белгән тамашаса шул мәлдә, моғайын, быны сәбәбен аңлап, көлөмһөрәп ҡуйғандыр. Мин дә шулай иттем: улар үҙҙәренең атай-әсәй ғаиләһендә бер төрлө тәрбиә, мөнәсәбәттәр күреп үҫкән, тәрбиәләнгән, әммә үҙҙәре ҡорған ояла бындай өлгө лә, традициялар ҙа юҡ. Егеттәрҙең икеһе лә башҡа милләт ҡыҙҙарына өйләнгән, тимәк, башҡорт ғаиләһе ҡиммәттәре лә, йолалары ла, мөнәсәбәттәре лә икенсе юҫыҡта...

Ә шулай ҙа егеттәрҙең береһе тиҙ генә үҙен ҡулға алды һәм ниндәй генә һорау ҡуйылмаһын, атаһы менән әсәһенең мөнәсәбәте тураһында ғорурлыҡ менән һөйләй башланы. "Бер ваҡыт атайым нимәләрҙер асыуланды ла, өс минут самаһы бер туҡтамай әсәйемә әр һүҙҙәрен теҙҙе. Әсәйем тауыш-өнһеҙ ултырҙы ла, өс минуттан һуң: "Етте!" - тип өҙә генә әйткәйне, атайым шып туҡтаны ла ҡуйҙы..." Тапшырыуҙы алып барыусы ла уны йөпләп: "Бына мин дә олатай-өләсәйҙәрҙең, атай-әсәйҙәрҙең ҡысҡырып талашҡанын хәтерләмәйем..." - тип һүҙ ҡыҫтырғайны, әңгәмәсе: "Ниңә талашмаһын, талаша инеләр. Бына бер саҡ командировкала бер әбей менән бабайҙың өйөнә фатирға төштөк. "Телевизорығыҙ эшләйме?" - тип һорайым бабайҙан. "Юҡ, эшләмәй", - ти бабай. "Юҡ, эшләй", - ти әбейе. Бабайы тағы: "Юҡ, эшләмәй", - ти. Әбейе: "Юҡ, эшләй", - ти. Шулай бер нисә минут һүҙ көрәштерҙе былар..." Был миҫал менән егет тағы ла башҡорт ғаиләһендәге тартҡылашты бына ошондай кимәлдә генә булғанын раҫлап ҡуйҙы...

Ә әңгәмәләшеүселәрҙең икенсеһе бөтөнләй буталды. Ул үҙе лә ҡатнаш никахлы ғаиләлә үҫкән. Тимәк, ул, исмаһам, үҙ атай-әсәйенең мөнәсәбәттәре тураһында ла һөйләй алмай булып сыҡты. Үҙенең фекерһеҙ, традицияларһыҙ, таяныу нөктәһеҙ икәнен раҫланы...

...Таяныу нөктәһенән яҙҙырмаһаҡ ине балаларҙы, тип әйткем килә милләттәштәргә, бигерәк тә йәштәр ҡолағына инһен ине әйткәндәрем. Таяныу нөктәһе - ул тыуған тел, тыуған рух, тыуған мөхит. Шуны онотмайыҡ!

# КӘҢӘШ БИРЕРГӘ ХОҠУҠ

**"Бәхетнамә" тапшырыуында ҡатын-ҡыҙҙар менән бәхетле әсәй, бәхетле ҡатын тураһында һөйләшеү бара.**

Афариндар хәҙер йәш ҡатын-ҡыҙҙар: улар нисек итеп эш мөнәсәбәттәре ҡорорға ла, нисек уңышлы кеше, хатта нисек ир ҡатыны, әсәй булырға ла икәнен беләү. Үҙҙәре үҫкән ғаиләлә лә ошо йәһәттән өлгөлө тәрбиә алғандар, алып етмәгәндәре иһә башҡа замандаштары йоғонтоһонда, төрлө китаптар уҡып, хатта тренингтарҙа йөрөп өйрәнгән быға. Ғөмүмән, йәштәрҙең айыҡлыҡты, өлгөлө ир йә ҡатын, уңышлы кеше булыуҙы, тыуған телгә мөнәсәбәтте модаға әйләндерә барыуы бик яҡшы күренеш.

Әлбиттә, йәшлеге, тәжрибәһеҙлеге менән улар яңылыш һөйләп ҡуйыуы ла мөмкин. Был юлы ла телевидение тапшырыуында фекер алышҡан йәш ҡатындарҙы бик тә тәҙәткем килде. Мәҫәлән, ҡатындарҙың береһе шулай тине: "Үҙ ғаиләһен тарҡалыуҙан һаҡлап ҡала алмаған кешеләр башҡаларға кәңәш бирә алмай".

Бына һиңә - мә! Берәй сит ил авторының китабынан уҡығанмы ул быны? Ә эскән иренән тукмалып, йәберләнеп, балаларының йөрәген бөтөрөп йәшәгән, әммә ғаиләһен тарҡатмаған ҡатын-ҡыҙҙан ниндәй кәңәш алырға була һуң? Балаларҙы етем итмәйем тип түҙҙем, һеҙ ҙә түҙегеҙ, тигән кәңәштеме? Ә ул балаларҙың психологияһы ҡаҡшауы, үҙенең ауырыуға һабышыуы - ул ниндәй һабаҡ була ала? Ни өсөн балаларын мәғәнәһеҙ атайҙан, иҫерек ғаиләлар, иҫерек мәжлестәрҙән ҡурсылаған әсәй башҡаларға кәңәш бирә алмаҫҡа тейеш?

Тура эфирға шылтыратып, яңылыш фекер әйтеүсе йәш ҡатынды төҙәтергә ынтылдым да, кире уйланым. Йәш быуын вәкилдәре менән бәхәсләшеү бик ситен хәҙер: кемдәрелер тыңлай, кемдәрелер барыбер үҙенең һүҙен өҫтөн итергә тырышып, һинең тәнҡитеңә ҡаршы ҡайҙалыр уҡығанан дәлил итеп килтерә. Ни эшләйһең, башҡаларҙың йоғонтоһо көслөрәк шул беҙҙең балаларға. Был да хәҡиҡәт.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

**Элек-электән иғтибар итә киләм, бәғзе бер олпат йәштәге кешеләр үҙҙәренең ҡасандыр булған йәш саҡтарын, ғөмүмән, үткән быуынды маҡтап, хәҙерге йәштәрҙе тәнҡитләргә әүәҫләнеп китеүсән. Оло быуын вәкиле булыуыма ҡарамаҫтан, үҙем "Элек шәкәр ҙә татлыраҡ, һыу ҙа еүешерәк була торғайны..." тигән һымағыраҡ итеп фәлсәфәләп, һәр саҡ бөгөнгө көндөң тик ниндәйҙер етешһеҙлеген генә табырға тырышыу яҡлы түгелмен. Һүҙ юҡ, һәр заманда йәшәгән кешеләрҙең, улар алып барған тормоштоң ыңғай һәм кире яҡтары бар. Элек беҙҙең ауылда йәшәгән Солтанхәмит мулла олатай: "Заман - ул Аллаһ Тәғәләнеке. Заманды бер ҡасан да яманларға ярамай", - ти торғайны. Һәр дәүерҙә йәшәгән халыҡ үҙ заманына ярашлы ғәмәлдәр ҡыла инде ул.**

# БЕҘ ЙӘШ САҠТА...

## хәйер, бөгөнгө йәштәргә лә шөкөр бит



Уҙған быуаттың ун етенсе йылында батшаны төшөрөп, унан илдәге байҙарҙы бөтөрөп, "тигеҙ, рәхәт тормош" ҡороу өсөн көрәшкән олатайҙарыбыҙҙың йәш саҡтары менән ғорурланып үҫтек (ә ул саҡтағы ололарҙың быға нисек ҡаршы булыуы хаҡында һәммәбеҙ беләө). Граждандар һуғышы ветерандары, ауыл хужалығын коллективлаштырыусылар, кулактарҙы илдән ҡыуыуҙа ҡатнашҡан байтаҡ ҡына кешеләрҙең әле иҫән сағы ине. Ҙур почетта булған был олатайҙар менән осрашып, уларҙың яҡынлы телмәрен тыңлай инек. "Үәт ниндәй шәп кешеләр булған борон!" тип таң ҡалып, "Их, шулар һымаҡ батыр булып үҫәһе ине!" тип хыялланған саҡтарыбыҙ ҙа булманы түгел. Ә инде Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, немец фашистарын тармар иткән ағайҙарға бер ҡасан да тиңләшә алмаҫбыҙ һымаҡ тойолдо. Үҙебеҙҙән олораҡ, утты-һыуҙы кискән шул ағайҙар беҙҙең быуын йәштәрен ҡайсаҡ ниҙер өсөн бер аҙ шелтәләп алһа, улар менән килешергә тырыштыҡ. Ул саҡтағы комсомол ойошмалары сафында булған күпселегебеҙ, шул союздың уставына ярашлы, үҙебеҙҙе, бер-беребеҙҙе лә коммунистик рухта тәрбиәләү өҫтөндә әүҙем эшләнек. Быуыныбыҙ йәштәре Афғанстан еренә барып, хөкүмәтебеҙ ҡушҡан "интернациональ бурыс"ты үтәп тә йөрөнө.

Ә инде тукһанынсы йылдарҙа илебеҙҙең яңы сәйәсәтенә ярашлы, ең һыҙғанып, "үҙгәртеп ҡороуҙарға" керешеп киттек. Яңы тормош яҡлы сәйәсмәндәр "һайт" тиһә, беҙ ҙә "тайт" тип кенә торҙоҡ. Илдә капитализмдың ҡабаттан урынлашыуына ла артыҡ ҡаршылашманыҡ. Арабыҙҙа байҙар ҙа күренгеләй башланы. Шул мәлдәрҙә мин әле генә һанап киткән революция, граждандар һуғышы, колхозлашыуҙа ҡатнашҡан батыр олатайҙарыбыҙҙы әрләүселәр, хатта үҙебеҙҙең ил һаҡсыларын "әрәмтамаҡтар" тип һанаусылар ҙа табылды. Бер аҙҙан бындай "ҡыҙыу баштар" ҙа бер аҙ һыуына төшөп, тынысланып, бөгөнгө көнгә лә килеп еттек. Беҙ - оло ғына йәшкә еткәндәр, ана шул уҙған быуат урталарында тыуып үҫкән кешеләр бит инде. Шул замандың вәкиле булараҡ, бөгөн "атайҙар һәм балалар" темаһына йыш ҡына һүҙ йөрөтөп алырға яратам. Кем - нисек, әммә мин һәр саҡ хәҙерге быуын хаҡында: "Бөгөнгө йәштәребеҙ - бына тигән!" тип кенә әйткем килә.

Әле ошо мәҡәләмде яҙыуға барыбыҙ ҙа йыш ҡына мөрәжәғәт итергә тура килгән күп функциялы үҙәккә (МФЦ) сираттағы барыуым сәбәпсе булды. Ысынлап та, был ойошма бинаһына инеү менән матур кейенгән йәш егет һәм ҡыҙҙар һине мөләйем йөҙ менән ҡаршы ала. Әйтерһең, барыһы бер ғаиләлә үҫкән улар. Кемеһен генә алма, башта алсаҡ йылмайып сәләм бирә, унан матур ғына итеп ниндәй йомош менән килеүеңде һораша. Йомошоңдо әйтеүең була, шунда уҡ һине хеҙмәтләндерергә керешә. Берәй аңлашылмаған мәсьәләләр буйынса һорауҙарыңа ифрат тыйнаҡ, әҙәпле итеп яуап та бирә.

Сибай ҡалаһында тап ана шулай. Моғайын, башҡа ҡасабаларыбыҙҙа ла нәҡ беҙҙәге һымаҡ йәштәр эшләйҙер тигән инаныуҙамын. МФЦ-ла ғына түгел, банктарҙа, почталарҙа ла шундай уҡ тәртипле, әҙәпле йәш ҡыҙҙарыбыҙҙың кешеләргә ҡарата булған яҡшы мөғәмәләренән оло ҡәнәғәтлек кисереп, ифрат яҡшы кәйеф менән өйөнә ҡайтып китәһең. Сауҙа учреждениеларындағы эшләгән егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙы ла элекке Советтар Союзы заманындағы һатыусылар менән сағыштырып, "ер менән күк араһындағы" айырма тип әйтергә лә булыр ине, моғайын. Утыҙ-ҡырҡ йылдар элек магазинға инеп, берәй нәмә хаҡында: "Һеҙҙә шул әйбер бармы, күпме тора?"- тип һораһаң: "Уҡый белмәйһеңме әллә, ана бит, яҙылған!" - һымағыраҡ яуап ишеткеләгән ваҡыттар хәҙер тарихта ғына ҡалғандыр, тигән ышанысым бар. Завод-фабрикаларҙағы эштәрҙе, ауыл хужалығын да, башлыса йәштәр алып бара. Дауаханаларыбыҙҙа халыҡҡа хеҙмәт күрһәткән йәп-йәш табип һәм шәфҡәт туташтарына, мәктәптәрҙә, башҡа уҡыу йорттарында эшләгән педагог, ғалимдарыбыҙға ҡарап һөйөнөп бөтә алмайым. Үҙ эшен яратып башҡарған шул йәш егет-ҡыҙҙарыбыҙ хаҡында бына шундай фекерҙәмен бөгөн.

Ә инде әрме хеҙмәтен үтәүселәр тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Сирек быуат үҙем хәрби кеше булғаным өсөндәр ҙә, ил һаҡсыларыбыҙ айырыуса күңелгә яҡын. Шулай уҡ заманыбыҙ йәштәренең күпселеге хәмерфәләнгә лә битараф һымаҡ тойола әле ул. Һирәк-һаяҡ ҡына осраҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, ҡала урамдарында иҫерек йәштәрҙе лә күрмәҫһең тиерлек (утыҙ-ҡырҡ йылдар самаһы элек ундайҙар йыш ҡына осрай ине).

Динһеҙлек пропагандаланған уҙған быуатта ауылдарыбыҙҙа мәсеттәр ҙә булманы бит. Йәштәребеҙҙең дингә ҡарашы ла бөтөнләйгә кире ине. Шул быуаттың туҡһанынсы йылдары башында тәүге тапҡыр Сибай мәсетенә ингәнем бөгөнгөләй хәтеремдә. Йома көнө ине ул. Бәләкәй бер ағас йортто ҡулайлаштырып яһалған был ғибәҙәтханаға килгән ете-һигеҙ кеше минә бик күп һымаҡ тойолғайны. Йәмәғәт намаҙына килгәндәрҙең барыһы ла тиерлек үтә ҡарт бабай һәм әбейҙәр. Илдә коммунизм төҙөгән осорҙары динебеҙгә ҡаршы оҙаҡ йылдар әүҙем көрәш, атеистик пропагандалар эҙһеҙ ҡалмағайны шул: ғибәҙәт ҡылыусылар араһында йәштәр бөтөнләйгә юҡ ине. "Ошо ҡарттар үлеп бөтһә, илебеҙҙә дин тотоусылар бөтөнләйгә ҡалмаҫ", тигән уйҙар ҙа күңелгә килеп киткеләй ине шул саҡта...

Бәхеткә, бындай күңелһеҙ уйҙарым бушҡа булды. Әлхәмдүлиллаһ, ҡалабыҙҙа яңы, ҙур мәсет тә һалдылар. Сираттағы отпускыма ҡайтҡан һайын мәсеткә намаҙға йөрөүселәрҙең күбәйә барғанын, айырыуса йәштәребеҙҙең иман юлына баҫа башлауын күреп һөйөнөп бөтә алмаһым...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

***✓ Бына ошолай итеп томшоғонан тотаһың да нуҡтаны ат башына кейҙерәһең, шунан инде эйәк аҫтындағы ҡайышты эләһең. Тик нығ итеп тартмағыҙ, ат башы менән ҡайыш араһында өс бармаҡ һыйып торорға тейеш.***




Ошо һимеҙ, тоҡрой кәүҙәле кешене былай ҙа күрә алмай йөрөгән лейтенантҡа етә ҡалды:

- Бына нимә, иптәш Итәлмасов! Гражданкала һин алтын ҡабул иткәнһеңме, яҡут ҡабул иткәнһеңме, унда минең эшем юҡ. Ә бына бында беҙ ҡушҡан эште урын-еренә еткереп башҡарырға тейешһең! Ҡыҙыл Армия командирының теләһә ниндәй приказы һәр бер боец өсөн закон! Төшөндөңмө?

- Был күнекмәләреңдең дә, агас аттарыңдың да фронт өсөн һуҡыр тингә лә кәрәге юҡ. Минең ҡулыма мылтыҡ, ҡылыс тоттороғоҙ ҙа фронтҡа оҙатығыҙ! Бына унда мин үҙемдең кемлегемде күрһәтермен! - тип ебәрмәһенме Заһретдин. Сығырынан сыҡҡан лейтенант уның эргәһенә килеп баҫты ла ҡорһағынан түбән һалпайған ҡайышынан матҡып тотоп алды:

- Иң башта мин, иптәш Итәлмасов, бына ошо һалпайып төшкән ҡорһағыңды шиндерәм! Унан һуң, әгәр кәрәк тапһаҡ, мылтыҡ, ҡылыс ышанып тапшырырбыҙ! Ә хәҙергә занятие мәлендә ләпелдәп торғаның өсөн сираттан тыш өс наряд! Все! Понятно?

- Так точно!

- Бына шулай!

Кис бөтә ҡыҙылармеецтар йоҡларға ятыр алдынан арманһыҙ булып арыған Заһретдинды сираттан тыш нарядҡа алып киттеләр. Ул төн буйы ҡыҙылармеецтар ашханаһында күҙен аса-йома картуф таҙартты. Мендәр аҫтындағы һөйәк һаплы бысағымды алып килһе булған да бит тип, бысраҡ таш иҙәндә фарман биреп йөрөгән өлкән сержантты һүкте. Ә теге бының уйын белгәндәй:

- Бына ошо бер мискә картуфты әрсеп бөтөрәһең. Боецтарға иртәнге аш бешереүгә әҙер булырға тейеш! - тине лә таҙартылған картуфты һалыу өсөн буш мискә килтереп ултыртты. Ҡара тупраҡ йәбешеп ҡатҡан картуфты Заһретдин кухня бысағы менән әрсей генә башлағайны, помкомвзвода тағы эргәһенә килеп баҫты:

- Һин нимә, иптәш боец, картуфтың ҡабығын шул тиклем ҡалын итеп әрсейһең? Беренсенән, гимнастеркаңдың еңдәрен һыҙған, ә бынынды!.. - ул Заһретдиндың аҫҡа шылып төшкән пилоткаһын һауыт-һаба кәштәһенә ҡағылған сәйгә элде. - Картуфты ошолай итеп әрсеһәң, иртәгә бөтә эскадронды ас ҡалдыраһың! - Өлкән сержант күҙ асып йомғансы ике картуф әрсеп буш мискәгә ырғытты.

Заһретдин нисек кенә тырышмаһын, картуф тултырылған мискә кәмемәне, маңлайынан аҡҡан ҡара тир күҙҙәрен томаланы, киң яңаҡтары буйлап иҙәнгә аҡты. Уның өсөн был донъяла яртыһы серек картуфты әрсеүҙән дә ҡыйын эш юҡтыр төҫлө тойолдо. Аптырағас, бысағын ситкә атып бәрҙе лә аяғына баҫып, бер-ике тапҡыр кирелде. Нишләһен, ҡәһәрле мискә тирәләй бер-ике ураны ла яңынан урынына ултырҙы.

Нисек етте шулай төн үткәргән Заһретдинды таң менән занятиеға алып сыҡтылар. Уның менән кухняла бергә эшләгән иптәштәре сисенделәр ҙә йоҡларға яттылар. Етмәһә, кеҫәләренә тултырып ҡайһыһы борсаҡ, ҡайһыһы яртышар буханка икмәк, ә сосораҡтары үҙ иптәштәрен ашатырға колбаса киҫәге лә алып ҡайтҡан. Заһретдинда ул ҡайғы булманы, аяғөҫтө йоҡлай-йоҡлай саҡ казармаға килеп йығылды. Башҡалар кеүек, һәндерә мөйөшөнә ултырып итеген һала ғына башлағайны, взвод командиры Заһретдин алдына килеп баҫты ла:

- Итегеңде кей ҙә занятиеға шагом марш! Живо! - тип екерҙе.

Заһретдин барған ыңғайға ҡайышын быуа-быуа: "Сираттан тыш наряд тигәне ошолайтып йоҡлатмай әҙәм ыҙалатыу була икән", - тип уйланы.

Бөгөн эскадрондың взвод командирҙары, ярҙамсылары ла йылтыратып таҙартылған итектәренә шпорҙарын, билдәренә шашкаларын тағып, яурындарына карабиндарын аҫып сыҡҡан. Эскадрон старшинаһы Заровняев теҙелеп торған саф алдына килеп баҫты. Башта ул зәңгәр фуражкаһының эйәге аҫтына төшөрөлгән ҡайышын, планшетын төҙәтте, ҡамыт аяҡтарын бер-береһенә шаҡылдатып алды ла ҡашын төйнәп, күҙен йүгертеп сафҡа ҡарап алды. Эргәһендә торған взвод командирҙары менән бер нисә һүҙ алмашты ла, әсе тауыш менән:

- Равня-йсь! - тип команда бирҙе. Шунан сафтың бер осонаса йөрөп тигеҙлекте тикшереп ҡараны ла: - Һулдан бишенсе! Ҡорһағың үҙеңдеке булһа, эскә тарт! Алтынсы! Күкрәгеңде алғараҡ! - тип екерҙе. "Смирно!" командаһын бирҙе. Ҡап уртаға баҫып баяғы планшетынан бәләкәй генә күк тышлы китап сығарҙы. Уны башы осонда бер нисә ҡат әйләндерҙе:

- Был китап эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһы кавалерияһының боевой уставы! Тәүге битенән аҙаҡҡыһына тиклем бөтә параграфын белеү - һәр бер ҡыҙыл атлының мөҡәддәс бурысы! Үҙ фамилияңды онотҡанда ла, уставтың төп пункттарын шартлатып әйтеп бирергә кәрәк. Төшөндөгөҙмө?

Яуап урынына эскадрон сафында ниндәйҙер шау-шыу ишетелеп ҡалды. Старшина ризаһыҙлығын белдереп, башын күтәреп, янынан сафҡа текәлде:

- Бер ни ҙә ишетмәйем, төшөнөшлөмө?

- Төшөндөк, аңлашыла! - тигән һирәк-мирәк тауыштар ишетелде.

Эскадрон, манеж яңғыратып бер тауыштан: "Төшөндөк!" - тип ҡысҡырмайынса тороп старшина һорауын туҡтатманы. Шунан ғына бөгөнгө занятиеның йөкмәткеһен аңлатырға кереште. Әммә әйтәһе төп һүҙгә еткәнсе, кавалерия тарихына төшөп китте.

- Кавалерияла борон-борондан ир-егеттәрҙең аҫылы, урта бармаҡ шикеллеләре генә хеҙмәт иткән. Ә батша заманында кавалерия дворян, кенәз, граф балалары менән генә комплектовать ителгән. Тик Совет власы ғына беҙҙең кеүек ярлы эшсе-крәҫтиән балаһына иң почетлы ҡоралы ғәскәрҙәр төрө, кавалерияла, хеҙмәт итеү мөмкинлеген бирҙе, - тип ул башын өҫкәрәк күтәрҙе, былай ҙа ҡалҡып торған күкрәген тағы ла алғараҡ сығарып, уң ҡулы менән шашкаһының эфесына тотондо ла ҡынынан шаҡылдатып сығара биреп кире тыҡты.

- Ҡала урамында арғымаҡҡа атланып ҡыҙҙарҙың күҙен ҡыҙҙырып үтеп китеүе генә ҡыҙыҡ ул. Атҡа атлана башлауҙан алда һеҙ өйрәнәһе баҫҡыстары бар. Бөгөн беҙ шуларҙан башлайбыҙ. Денникта торған атҡа яҡын килеп уның менән танышыу, уға йүгән кейҙереү, аттың торошон тикшереү һәм атланырҙан алда уны таҙартыу күнекмәләрен башларға тейешбеҙ. Бынан тыш, уны эйәрләү, теҙгененән тотоп һарайынан сығарыу, атҡа атланғас, теҙгендәрҙе нисек тотоу, аттан төшкәс, эйәрен алыу һәм ат ҡарау бурыстары тора. - Старшина ҙур ләззәт менән һөйләп алды. - Хәҙергә барыбыҙға ла ат етешмәй, барыһы һигеҙ генә ат ҡалды, ә ҡалғандарын училищеға һәм фронтҡа оҙаттыҡ. Бер нисә көндән Башҡортостандан килеп етергә тейеш, бына шунан инде һәр беребеҙ, үҙ атыбыҙ менән эшләй башлаясаҡбыҙ, - тине.

Яңы хәбәрҙе ишетеү менән Ғилмишәриф, күптән күрмәгән яҡын танышын ашҡынып көткән кеше кеүек, РККА фондынан армияға алынмай ауылда тороп ҡалған аттарҙы күҙ алдынан үткәрҙе. Киләһе арғымаҡтар араһында үҙе тәрбиәләп үҫтергән аттарҙың булыуында уның шиге юҡ ине. "Бөтә Башҡортостанда билдәле, үҙенең КТФ-һы менән Мәскәүҙә Бөтә Союз Ауыл хужалығы күргәҙмәһендә бер нисә тапҡыр ҡатнашҡан колхоздан бер-ике ат килеп эләкмәүе мөмкин түгел", - тип Ғилмишәриф эстән генә шатланды.

Бер аҙҙан взводтарҙы отделениеларға бүлеп һөнәргә өйрәтергә керештеләр. Старшина Ғилмишәрифтәрҙең отделениеһын ат һарайына алып китте. Денникта әкрен генә ат кешнәгән тауыш ишетелеп ҡалды. Старшина шунда уҡ:

- Быстрый, спокойно, стоять! - тип ҡысҡырҙы. Таныш тауышты ишетеп аттар тынып ҡалды. Бысҡы вағы түшәлгән асфальт иҙәндә аяҡтарын тыҡылдатып торған Быстрый старшинаны ҙур күҙҙәрен тултырып, муйынын һуҙып ҡаршы алды.

Старшина ҡапҡаға күрһәтеп:

- Бына ошо таҡтаға аттың исеме, башҡа мәғлүмәттәре яҙыла, - тип уҡып күрһәтте.

"Айғыр Быстрый, 1935 йыл тыуған, атаһы - Белан, әсәһе - Строгая, ахалтекин тоҡомонан". Бына бында эйәр, йүгән, нуҡта эленә, ә был йәшниктә ат таҙарта торған кәрәкле нәмәләр, ә быныһы инде ат һуғара торған биҙрә. - Ул кеҫәһенән сығарып бер шаҡмаҡ шәкәрҙе Быстрыйҙың ауыҙына ҡаптырҙы ла яртыһы коридорға сығып торған һоло утлыҡсаһын ҡарап алды. Шунан: - Красноармеец Итәлмасов, йә әйт әле: ат алдындағы кормушканың тап-таҙа булыуы ни нәмәне аңлата? - тине.

Бындай һорауҙы көтмәгән Заһретдин аяҡтарын алмашлап баҫып алды ла:

- Был, иптәш старшина, ат алдына һалған корманы ашап бөткән, ә хәҙер ас тора, тигәнде аңлата, - тип яуап бирҙе.

- Гөмүмән, яуап дөрөҫ, ләкин тулыһынса түгел. Ат алдындағы кормушкаларҙың таҙа булыуы, тимәк, ул ат таҙа, һау-сәләмәт, ундай атҡа хәҙер үк атланып фашист өҫтөнә ташланырға мөмкин тигәнде аңлата. Төшөндөңмө?

- Төшөндөм.

- Ә бына күрше денникта торған Гунгуттың кормушкаһын ҡарағыҙ, уның курмыһы тик яртылаш ҡына ашалған, тимәк, ул ат сырхаулай, ысынында ла уның ашҡаҙанын гастрит яфалай, - тип старшина өйрәтәһе күнекмәләргә күсте. Стена ҡырында ултырған биҙрәне бер ҡыҙылармеецҡа тотторҙо ла: - Быстрыйҙы ваҡытында һуғармағандар. Уның тамағы кипкән, йәһәт кенә ҡоҙоҡтан бер биҙрә һыу алып кил! - тип бойорҙо. Аҙаҡ, ҡылысына тиклем һыу тулы биҙрәгә ҡулын тығып ҡарағас:

- Бик һыуыҡ, был көйөнсә эсерергә ярамай, атҡа һалҡын тейеүе бар, - тип биҙрә эсенә ике ус бесән ырғытты. - Биҙрәгә бесән ташлаһаң, ат һыуҙы һемереп түгел, ә теше араһынан һурып ҡына эсә, шуның менән ул үҙен һалҡын тейеүҙән һаҡлай. Төшөндөңмө?

- Так точно!

- Күрҙегеҙме, мин Быстрыйҙың арт яғынан индем. Сөнки ул мине белә, минән ҡурҡмай, ә устав буйынса денниктың ишеген асҡан һәр кавалерист аттың исемен атап, уның башы менән үҙенә боролғанын көтөргә тейеш, сөнки ат, аҡыллы хайуан, изге теләгеңде аңламай тороп бер ваҡытта ла һиңә башы менән боролмай. Бына ошолай, - тип ул Быстрыйҙы башы менән ҡапҡаға борҙо ла уның һул яғына сығып муйынынан һөйҙө. - Ат һиңә башын бороу менән тик һул яғынан килергә кәрәк. Уң яғына сығыу устав буйынса ҡәтғи тыйыла. Атығыҙға шәкәр йәки кишер һонғанда бармаҡ осоғоҙ менән тотмағыҙ, сөнки тегенең бармаҡтарығыҙҙы ла эләктереп алыуы мөмкин, бына ошолай итеп бирегеҙ, - тип ул үҙенең сираттағы күстәнәсен, икмәк киҫәген, усы эсенә һалып һондо. - Ә хәҙер инде Быстрыйҙы денниктан алып сығырға кәрәк. Бына ошолай итеп уң ҡулың менән томшоғонан тотаһың да һул ҡулың менән нуҡтаны ат башына кейҙерәһең, шунан инде эйәк аҫтындағы ҡайышты эләһең. Тик нығ итеп тартмағыҙ, ат башы менән ҡайыш араһында өс бармаҡ һыйып торорға тейеш. Атты сығарғанда нуктаның чумбуры һәр ваҡыт уртаға бөкләнгән көйөнсә һинең һул ҡулыңда булырға тейеш.

- Иптәш старшина, ә нимә һуң ул чумбур?

- Чумбур - беҙ кейҙергән нуҡтаның ҡулға тота торған ебе була.

- Беҙ "теҙген" тип әйтә торғайныҡ.

- Теҙген атланған атты идара итеү өсөн ауыҙлыҡтың ике осона беркетелгән бәләкәй дилбегә ул. Ә был чумбур - башҡа исеме юҡ, устав буйынса ла чумбур. Нуҡтаны кейҙерҙек. Ә инде хәҙер Быстрыйҙы ат һарайынан тышҡа, манежға, сығарырға кәрәк. Уны ошолай итеп эшләйҙәр: уң ҡулың менән чумбур тоташтырылған дуңгәләк аҫтынан тотаһың да һул аяғыңды күтәргән саҡта чумбур тотҡан уң ҡулыңды алға һонаһың. Икеһе бер ваҡытта эшләнергә тейеш, - тип уның менән йәнәш атлаған Быстрыйҙы денниктан коридорға алып сығып та китте. - Мә, иптәш Итәлмасов, Быстрыйҙы янынан коридорға сығар, - тип чумбурҙы уның ҡулына тотторҙо.

Заһретдин атҡа әйләнде лә теҙгененән тартҡылай башланы, мәгәр ат аҙым да алға атламаны, киреһенсә, артҡа сигенде.

- Прекратить! - тип ҡысҡырҙы старшина. - Чумбурыңды алға һонмаһаң, кавалерияның бер аты ла алға ҡуҙғалмаясаҡ, сөнки ул һинең командаңды аңламаны. Үҙең бер урында тороп, уң ҡулыңдағы чумбурҙы алға һуҙһаң да тик торасаҡ, сөнки ат һинең устав буйынса эшләмәгәнеңде күреп тора, - тип өйрәтте старшина. Бынан һуң ул атты таҙартҡан саҡта чумбурҙы дуңгәләккә нисек бәйләү ысулын өйрәтте.

**(Дауамы. Башы 29-30-сы һандарҙа).**

*✓ Яҙ, йәй ҡымыҙлыҡ, кесерткән, ат ҡолағы, ҡуян тубығы кеүек үләндәрҙең береһен дә ҡалдырмай ашай халыҡ. Ягырға утын юҡ. Һалам, тиҙәк яғып ҡыш сығалар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТӨШӨҢ ТӨҪЛӨМӨ?

■ Һимереүҙең типтары төрлө була - кемдеңдер биленә, кемдеңдер аяғына, янбашына май күберәк йыйыла. Лондон колледжы белгестәре билдәләүенсә, билдәге артыҡ май баш мейеһе торошо менән бәйле икән. Бил йыуанырак булған һайын, мейенең ҡайһы бер өлөштәре кәмей. Тап ошо өлөштәр күп функцияларға, мәсәлән, эске ағзалар эшмәкәрлегенә яуаплы. Һимеҙлек менән яфаланыусылар еҫтәрҙе лә насар айыра. Ә кеше ризыҡты башлыса еҫенә ҡарап һайлай.

■ Миннесота университеты ғалимдары асыҡлауынса, ата-әсәһе артыҡ ныҡ ҡурсалаған һәм контролдә тотҡан балаларҙың уҡыуы насар була. Бынан тыш, бындай балаларға дуҫтар табыуы ла ауыр. Эксперттар фекеренсә, ҙурайған саҡта бала үҙенең тойғолары һәм ҡылыҡтары менән идара итергә өйрәнергә тейеш. Өлкәндәр яғынан булған контроль уларға ошоно үтергә ҡамасаулай. Тикшеренеүселәр 8 йыл дауамында 422 бала менән шөғөлләнә. Белгестәр ата-әсәләр менән баланың үҙ-ара мөнәсәбәтен дә күҙәткән. Нимә эшләргә кәрәклеген гел әйтеп торған әсәйҙәрҙең балалары үҙенең тойғоларына баш була белмәгән, уҙҙәрен насар тотҡан. 2 йәшлек балаға гел нотоҡ уҡып тораһығыҙ икән, 5 йәшкә еткәс унын насар ҡылыҡтарына аптырарға кәрәкмәй. 5 йәштә бала үҙе ҡылған эштәрҙең насармы, яҡшымы икәнен аңларға тейеш. Был йәштә ошоға өлгәшкән бала 10 йәшкә еткәндә үҙенең хистәрен тыйып тота белә, тимәк, тормоштоң социаль өлкәһендә уңышлыраҡ була, мәктәптә яҡшыраҡ уҡый. Баланы артыҡ ҡурсаларға түгел, ә уға тойғоларын контролдә тоторға өйрәтергә кәрәк ғаиләлә.

■ Төш, ғәҙәттә, ҡаралы-аҡлы була. Шул уҡ ваҡытта, сағыу төштәр күреүселәр ҙә бар арабыҙҙа. Был уларҙың интеллект кимәле бик юғары икәнен белдерә. Америка ғалимдары фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллекты юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһәләр ҙә, уянғас, уны онотоуҙары тураһында белдергән. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүҙәрен әйткән. Тик аҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы ентекләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллектуаль һәләттәрен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

■ Түбән итеп сәй эсеп алғандан һуң күнел күтәрелеп китә. Сәйҙән бигерәк, уға ҡушып ашалған тәм-том нервыларҙы тынысландыра. Әммә нервы көсөргәнеше ваҡытында организм шәкәрҙе тотоноп бөтә һала ла, янынан яңы порциялар талап итеп тик тора. Шуға ла тәүҙә күңелеҙҙе өйкәп торған проблеманы хәл итегеҙ. Унан һуң сәй эсеп алғанда ла була. Ә бына иммунитет түбәнәйгәндә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һәҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# АТАЙСАЛ ТИП ЯНҒАНДАР...

## батыр ауылы Кинйәлә йәшәй



**"Һуғышты иҫләйһегеҙме?" тигән һорауға Закир ағай:**
**- Иҫләү генәме? Мин уның эсендә булдым, - тип яуапланы.**
**- Нисек? Һеҙ бит 10 йәшлек кенә бала булғанһығыҙ...**
**- Әсәйебеҙҙе Украинаға вербовка менән ебәргәйнеләр. Ғайса ағайым менән беҙ ҙә уның менән бергә киттек. Әсәй ярҙамсы хужалыкта эшләнә. Украиндарҙа фатирҙа торҙоҡ. Һуғыштың тәүге көнөндә үк мәхшәр башланды. Ризыҡ юҡ - нимә табабыҙ, шуны ашайбыҙ. Күп тә тормай, беҙҙең кеүек балаларҙы йыйып, тылға оҙаттылар...**

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, шул айырылышыуҙан малайҙарҙың әсәһе менән бәйләнеше мәңгелеккә өҙөлә. Мәхшәрҙә ҡәҙерләләренең иҫән ҡалыуы ла икеле. Уны аҙаҡ эҙләп ҡарайҙар, әммә һөҙөмтә булмай. Үҫмерҙәрҙе Силәбегә алып килеп, 14-се ФЗО-ға урынлаштыралар. Бирглән кейемдәре - фуфайка, йоҡа ғына салбар, башта - сепрәктән тегелгән бүрек, аяҡта иһә ҡыш та, йәй ҙә - ботинка. Ауылда еңелерәк булыр тип, Ғайса ағаһы шунда уҡ тыуған яғына юллана.

Закир кеүек 700-ләгән үҫмер оҙон саман йорттарҙа йәшәй. Өлкәнерәктәр заводта эшләй. Бәләкәйерәктәрҙе төҙөләш бригадаһына тәғәйенләйҙәр. Улар дүрт саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан таҡта ярыу цехына йәйәү йөрөп эшләй. Шул уҡ ваҡытта Силәбелә йөҙҙән ашыу йорт төҙөйҙәр. Малайҙар бүрәнә ташый, уны быса. Ауырҙарына көсө етмәйенсә, хәлдән тайлар. "Бориев тигән мастер беҙҙең кеүек бала-сағаны эшкә өйрәтеп йөрөнө, - тип хәтерләй ветеран. - Заводта шлифовщик та булырға тура килде. "ЧТЗ" тракторынан һуғыш өсөн танктар эшләгән өлкәндәргә ярҙам иттек. Ун икешәр сәғәт аяғөҫтө тороп, хәлдән тая инек, аслы-туҡлы йәшәнек. Ризыҡ ҡиммәт булды. Эш хаҡына тип бирелгән 300 - 500 һум аҡса икмәк менән тукланырға ғына етә ине".

Станцияға килгән вагондарҙы бушатырға ла йөрөткәндәр үҫмерҙәрҙе. "Полундра!" тип ҡысҡырып уята ине физрук беҙҙе төн уртаһында, - ти Закир ағай. - Цемент, ҡырсын, алибастр, бүрәнә тейәп килгән вагондарҙы төнө буйы бушатабыҙ. Ләкин иртә менән, ял да иттермәйенсә, тағы эшкә алып китәләр".

Ике йыл ярымдан һуң үҫмерҙәргә ял бирелә. Улар тыуған яғына ҡайтып килергә рөхсәт ала. Закирҙың атаһы һуғышҡа киткәнсе янынан өйләнеп, ауылда уның балалары һәм ҡатыны ҡалған була. Әмир менән Рәхимә туғандары: "Ағай, асығабыҙ, ҡайт!" - тип яҙғас, Закир Силәбегә башҡа бармаҫҡа ҡарар итә. Һуғыш осорондағы закон буйынса эш урынынан ұҙаллы киткән кешеләрҙе ҡаты хөкөм көтә. Мәсәлән, Миәкә районынан берәүҙе, поезд аҫтында ҡалып, аяғын иҙҙерһә лә, хәрби трибунал менән алты йылға иркенән мәхрүм итәләр. Ә Закирҙың эшләгән еренә Каганович исемендәге колхоз рәйесе Фазулла ағай Ғәҙелшин: "Беҙгә тракторсылар кәрәк, курсҡа уҡырға ебәрҙек", - тигән хат яҙып һала. Шулай итеп, үҫмер күрше Таймаҫ ауылында белем ала башлай. Үгәй әсәһе мысай ҡатыш ярты бот игенде ҡул тирмәненән тартып, икмәк бешерә лә, яртыһын Закирға тоттороп ебәрә, бүтән өлөшө уҙҙәренә ҡала. Үҫмер шул ризыҡты бер аҙнаға еткерә. Хәтифә исемле әбейҙә фатирҙа тороп, өс ай буйы уҡый. Ашарға икмәктән башҡа бер нәмә лә юҡ. Сәйе лә мәтрүшкәнән. Яҙ, йәй ҡымыҙлыҡ, кесерткән, ат ҡолағы, ҡуян тубығы кеүек үләндәрҙең береһен дә ҡалдырмай ашай халыҡ. Ягырға утын юҡ. Ҡыш буйы йәйгеһен иген һаҡлай торған ырҙын табағының һалам менән ябылған башын бәләкәй санаға һалып ташыйҙар. Аҙаҡ тағы көпләп ҡуялар. Шулай һалам, тиҙәк яғып ҡыш сығалар.

Өс ай уҡып ҡайтҡан Закир Сәмсиә Хөсәйенова, Зөһрә Шәрипова, Айһылыу Исхаҡова кеүек апайҙарға алмаш булып эшкә тотона. Башта ике йыл тәүгеһенең ярҙамсыһы булып йөрөй. Ауыл халҡы, үҙ ауыҙынан өҙөп, фронтҡа ярҙам итә: заем ала, ойоҡ-бейәләй бәйләп ебәрә. Аҡса тиген нәмәне күрмәйҙәр ҙә. Эшкә сыҡһаң, хеҙмәт хаҡына көнөнә бер "таяҡ" яҙалар. Шуға ҡарап, көҙгөһөн иген бүләләр.

Көнө-төнө эшләп, аслы-туҡлы йәшәп, Кинйә ауылы халҡы ла Еңеүҙе яҡынайтыуға үҙ өлөшөн индерә. Һуғыш бөткәнен ауылда йыйылыш яһап хәбәр итәләр. Закир ағайҙың атаһы Дилмөхәмәт ағай бер йылдан һуң ғына ҡайта һуғыштан. Мал ҡараусы ла була, йылҡы ла көтә. Өйҙә ир ҡулы булғас, Закир Мораҡҡа тракторсы һөнәрен үҙләштерергә китә. Алты айлыҡ курсты тамамлап, ер эшен дауам итә. 45 йыл тракторҙа эшләй ул. Әйтеүе генә анһат! Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа ауыл хужалығын күтәреү өсөн һаулығын да, ваҡытын да йәлләмәй, һөҙөмтәлә төрлө маҡтаулы исемдәргә лайыҡ була.

Яҡшембәт ауылындағы Зөлхиә Бикмаева тигән һылыуға өйләнеп, туғыҙ балаға ғүмер бирәләр. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, сабыйҙарының икәүһе

ШУЛАЙ ҘА БУЛА

# БӘҒЗЕ ХАЙУАНДАР...

## кешенән аҡыллыраҡ



**Атайым вафатына тиклем райпола әҙерләүсе булып эшләне: халыҡтан йөн, тире-маҙар, макулатура йыйҙы. Ул бик мал йәнле кеше ине - хөкүмәт аттарын да үҙенең балаларынан артыҡ күреп ҡараны. Сивка тигән бейәһе булды. Шул хәтлем һөтө күп булып, көнөнә 4-5 литр ҡымыҙ бешеп ала инек. Уның Казбек тигән ҡолоно йәйгеһен бесән мәлендә ҡүмерле усаҡҡа ятып, тиреһе янып, яраһы саҡ төҙәлде.**

Атайым яман сиргә тәл булып түшәккә яткас, теге Сивка ҡолоно менән ғәйеп булды ла ҡуйҙы. Эҙләп-эҙләп тә тапманылар. Атайҙы июндең 27-дә ерләнек. Йәй бик ҡоро килгәйне, әммә ошо көндә ҡойоп ямғыр яуҙы. Атайҙы ерләргә тау башындағы зыяратҡа алып барғас, шул урында теге Сивка ҡолоно менән пәйҙә булды. Кәфендәге хужаһы эргәһенә барып, түгелеп иланы. Йәше юлаҡ-юлаҡ булып аҡты. Аттың илағанын тәүгә күрҙем.

Атайымдың Муйнаҡ тигән эте бар ине. Атай үлгәс, ул да ғәйеп булды. Иртәгәһенә зыяратҡа барһаҡ, теге һәптеюк ҡәберҙе соҡоп ташлаған. Илап, бошоноп йөрөнө лә, тамағына ла йүнләп ашамай, бер көн кәбән төбөндә үлеп ятҡан.

Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.

*✓ Ҡасандыр бөтөүгә дусар булған Кинйәне хәҙер танырлыҡ та түгел. Бәләкәй булһа ла, урамдарға асфальт түшәлгән. Фермерлыҡ менән шөғөлләнеүселәр бар. "Айыҡ ауыл" конкурсында еңеү яулағандар.*



бәләкәй сағында баҡыйлыҡҡа күсә. Иҫәндәре, шөкөр, тормошта үҙ урынын табып, уҡып, һөнәр алып, эшләп йөрөй. Тыуған ауылы Кинйә бөтөүгә табан барғас, балаларҙы уҡытырға кәрәк тип, Исхаҡовтар ҙурыраҡ ауылға - күрше Яҡупҡа - күсеп йәшәй башлай. Унда төпләнгәндәренә лә хәҙер дүрт тиҫтә йыл ваҡыт уҙған.

* * *

...Таныш түгел ауылға килеп ингәс, йомошоңдо хәл итер өсөн, ғәҙәттә, магазинға бараһың, сөнки ул - халыҡтың ниҙер һатып алыр урыны ғына түгел, ә осрашып һөйләшеү, гәпләшеү, яңылыҡтарҙы уртаҡлашыу, хәл белешеү ере лә. Беҙ ҙә шуға магазинға юлландыҡ. Унда биш-алты ҡатын һөйләшеп тора ине. Сәләм биреп, Закир ағайҙың өйө ҡайҙалығын һораштыҡ.

- Уңға боролһағыҙ, иң матур өйҙө күрерһегеҙ. Шунда туҡтағыҙ, - тинеләр беҙгә.

Ысынлап та, Яҡуптағы иң матур йорт Закир ағайҙыҡы булып сыҡты. Ихаталағы төҙөклөк, тәртип, йәйге веранда, уға ҡушылып төҙөлгән мунса, һоҡланғыс баҡсаһы - барыһы ла бында уңған хужалар йәшәгәне хаҡында һөйләй. "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамында "Иң матур өй" тигән исем юҡҡа ғына бирелмәгән әлеге йортҡа. Закир ағайҙың 60 йылдан ашыу бергә татыу ғүмер иткән ҡатыны Зөлхиә апай өс йыл элек вафат булған. Әммә балалары өйҙөң ҡотон ебәрмәй, алмашлап ҡайтып, атаһын тәрбиәләп тора. Йәйге ял ваҡытында ағайҙың күркәм йорто балалар тауышынан гөрләп тора. 17 бүлә-бүләсәре Закир ағайға күңелһеҙләнергә ирек бирмәй. Берәүҙәре ҡайта, икенселәре китә, тигәндәй. Йәйге веранданың ике яҡ стенаһын тултырып, барлыҡ балаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең фотолары ҡуйылған. Тотош ғаилә альбомы һыйған да ҡуйған. Бына улар - Закир ағайҙың бөтөн байлығы, Исхаҡовтарҙың нәҫеле, үҙеңдән һуң ҡалыр ғүмер дауамы.

Олпат йәштәге ветеран менән хушлашып, ҡайтырға йыйынғанда ағайыбыҙ иң мөһим хәбәрен әйтеп һалды:

- Кинйә Арыҫлановтың ҡәберен дә мин таптым бит...

- Нисек?

- Борон беҙҙең Кинйәлә ялланып көтөү көтөп йәшәгән биш-алты ҡаҙаҡ ғаиләһе булған. Бынан тап 60 йыл элек Ырымбур өлкәһендәге Белозерка тигән ауылға тирмән тарттырырға барҙым. Шунда бер ҡаҙаҡ бабайы менән таныштым. Ул минең Кинйәнән икәнде белгәс, олатаһы батырҙың ҡайҙа күмелгәне хаҡында әйтеп ҡалдырғанлығын хәбәр итте. Ауыл зыяратында түгел, ә ситтәрәк, Кинйә тауында икәнлеген белдерҙе...

Күп йылдар үткәс, Зиннур улы эшҡыуар булып хәлләнгәс, был зыяратты кирбес менән уратып ҡуя Исхаҡовтар. Шулай итеп, батырҙың һуңғы төйәген халҡыбыҙға танытыуҙа, рухиәтебеҙҙе һаҡлауҙа сауаплы эш башҡаралар. Әйткәндәй, "Южурал-Ойл" йәмғиәтенең генераль директоры Зиннур Закир улының яҡташтарына күрһәткән изгелектәре бынан башҡа ла бихисап.

* * *

...Беҙҙең был осрашыуға бер нисә йыл үтте. Үкенескә, Закир Дилмөхәмәт улы баҡыйлыҡҡа күсте. Әммә уның улы, күренекле эшҡыуар Зиннур Закир улы тыуған ауылы өсөн иҫ киткес күп эштәр башҡара.

Ҡасандыр, перспективаһыҙ тип, бөтөүгә дусар булған Кинйәне хәҙер танырлыҡ та түгел. Бәләкәй булһа ла, ул йәшәүен дауам итә. Урамдарға асфальт түшәлгән. Фермерлыҡ менән шөғөлләнеүселәр бар. "Айыҡ ауыл" конкурсында еңеү яулағандар. Мәргән уҡсылар бәйгеләре үткәреп, яҡын-тирә район, ауылдарҙан оҫталарҙы йыйғандар. Ағинәйҙәр йәштәрҙе рухи тәрбиәләүгә өлөштәрен индерә. Иң мөһиме: Кинйә ауылында һәр башҡортто үҙенә саҡырып торған изге урын бар: ул - батыр музейы. Матур итеп төҙөлгән, бай материал туплаған музей алдында Кинйә Арыҫлановтың бюсы ҡуйылған.

Һөйләйһе һүҙемдең әрәсәһе шунда: Кинйә ҡәберен тапҡан уҙаман Закир Исхаҡовтың улы, "Южурал-Ойл" йәмғиәтенең генераль директоры Зиннур Закир улы тыуған төйәгенең тарихын мәңгеләштереү буйынса оло хәстәрлек күрә. Әле республикала "Атайсал" тигән программаны ҡабул иткәнгә хәтлем байтаҡ йылдар элек эшҡыуар бында, Кинйә ҡәбере янында, тотош бер тарихи комплекс булдырған. 1812 йылда французларға ҡаршы яуҙа ҡатнашҡан ауылдаштарға стела ҡуйылған. Унда Кинйәнән киткән бөтә ир-егеттәрҙең исемдәре ташҡа яҙылған. Был бит ауылдаштар, туғандар өсөн ниндәй хазина, ғорурлыҡ! Уларҙы табыу өсөн күпме архив материалдары ҡутарылған. Артабан 1930 йылдарҙа репрессия ҡорбандарының исемлеге теркәлгән иҫтәлеккә таш та ҡуйылған, 1941 - 1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышына китеүселәр, яуҙа ятып ҡалыусылар, иҫән ҡайтыусы ветерандарға арналған һәйкәл ташы ла туғандарын уйға һала, улар алдында бер минут тын ҡалып башын эйеп, сәскәләр һала. Был тарихи комплекстың уртаһында - Кинйә Арыҫлановтың хәтер ташы. Батырҙың үткер ҡараштары быуаттар аша беҙгә ҡарай һәм бөгөнгө тормошобоҙҙоң ҡәҙерен белергә саҡыра кеүек. Зиннур Закир улының тырышлығы һәм, әлбиттә, ауылдаштарҙың ярҙамы менән комплекс уратып алынған, тауҙа урынлашҡанға күрә, менергә баҫҡыстар эшләнгән. Яҡында ғына Кинйә шишмәһе сылтырап аға. Ул да таҙартып, тәртипкә килтерелгән. Быйыл йәй, Көйөргәҙе районының һабантуйы ошо изге ерҙә үтте. Әлеге тарихи урындар менән дә таныштырылды килгән ҡунаҡтар һәм ихлас һоҡланыуҙарын белдерҙе.

Батырыбыҙ Кинйә Арыҫлановтың тыуыуына 300 йыл тулыу айҡанлы көйөргәҙеләрҙең башҡарған эштәре бихисап. Бер нисә йыл элек Кинйә Арыҫланов исемендәге премия булдырылғайны, быйыл уның миҙалын да эшләткәндәр. Ул хеҙмәт алдынғыларына, күренекле яҡташтарға тапшырылды. Көйөргәҙе районы хакимиәтенә, тарихты, хәтерҙе йәшәтеүсе Кинйә ауылы халҡына, бигерәк тә аталы-уллы Закир һәм Зиннур Исхаҡовтарға, фиҙаҡәр хеҙмәттәренә, яҡташтарға ҙур рәхмәт! Әгәр ҙә һәр беребеҙ тыуған яғы, ауылы өсөн ниндәй ҙә булһа изгелек эшләһә, киләсәге юҡ тип мөһөр һуғылған төбәктәр ҙә йәшәүен дауам итер ине. 20-нән ашыу ғына өйө булған, 138 генә кеше йәшәгән бәләкәй, әммә бөйөк Кинйә ауылы быға асыҡ миҫал.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ҺӨНӘРЛЕ БУЛЫП ҠАЙТТЫЛАР



**Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәре һәм биҙәүестәрен төп нөсхәһендә, һәр ырыуға хас булған үҙенсәлектәр менән тегеү-сигеүҙе кем башлап тергеҙҙе? Әлбиттә, районҙарҙағы беҙҙең ағинәйҙәр.**

Оҫталар Әбйәлилдә лә, Баймаҡта ла, Учалыла ла, Хәйбуллала ла, Йылайырҙа ла, башҡа районҙарҙа ла барҙар. Әммә Йылайыр районынан Рәйсә апай Янбаева менән Хафиза апай Амантаеваларҙы барыбер ҙә айырып әйтеп китергә кәрәк. Улар башҡорт ҡатын-ҡыҙының күлдәк-камзул-елән-ҡашмауын ғына түгел, һарыуыс, таҫтарҙарҙы ла, ир-егеттәрҙең күлдәк-ҡушаҡ кеүектәрен дә, көнкүреш әйберҙәренән таҫтамал, шаршау, торпоша-балаҫтарҙы ла үҙ ҡулдары менән сигә, ҡайый, һуға, һәр биҙәк-орнаменттың тарихын, нимә аңлатҡанын һөйләй алған беҙҙең иң зыялы, иң оҫта, иң ғилемле ағинәйҙәребеҙ.

Ошо көндәрҙә Рәйсә апай Янбаева күршеләрҙе - Баймаҡ, Хәйбулла, Ейәнсура районы ағинәйҙәрен Йылайыр ауылы мәҙәниәт йортондағы "Тәңкәбикә" ағинәйҙәр бүлмәһенә оҫталыҡ дәресенә саҡырҙы. Ҡунаҡтарҙы үҙе ижад иткән ҡул эштәренән - милли кейем, биҙәүестәр, таҫтамал-маҙарҙарҙан ойошторолған күргәҙмәһе менән бер хайран итһә, оҫталыҡ дәресендәге йөкмәткеле һабаҡтары менән тағы ла бер һоҡландырҙы. Алыҫ араларҙан килгән ағинәйҙәр таҫтар, һарыуыс, таҫтамал, ҡушаҡ эшләргә өйрәнеп, матур итеп аралашып, һөнәрле булып, бик ҡәнәғәт булып таралышты.

Афарин, Миләүшә Моратова етәкселек иткән Йылайыр "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларына, тип әйтке килә. Миләүшә Моратова үҙе лә, Рәйсә һәм Хафиза апайҙар, тағы бик күптәр республика кимәлендә үткән төрлө күргәҙмәләрҙә, башҡа сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Күрше районҙарға сығып, ошондай оҫталыҡ дәрестәре лә үткәрә. Юҡ, улар мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре түгел. Был эш өсөн улар эш хаҡы ла алмай. Улар был эште күңел ҡушыуы буйынса, үҙ иҫәптәренә башҡара. Милләттең аҫыл ҡомартҡыларын, йолаларын һаҡлау, башҡорт ҡатын-ҡыҙына ғына хас кәсептәрҙе тергеҙеп, киләсәк быуынға тапшырыу - бына уларҙың изге маҡсаты. Ағинәйҙәр бына шундай эштәр менән була...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

*БЫЛ -ҠЫҘЫҠ*

# ЯҢЫ ЙӘШЕЛСӘ

Һиндостан ғалимдары яңы йәшелсә уйлап тапҡан. Ул помидор һәм картуф гибриды, "помата" тип атала. Үҫемселек тикшеренеү институты ғалимдары күптән түгел картуф менән баклажанды берләштереп, бер үк үҫемлектән картуф та, баклажан да йыйып алғайны. Яңы гибрид бер миҙгелдә 3-4 кг картуф һәм 3 кг помидор уңышы бирә, имеш. Эксперименттың маҡсаты иһә - ҙур булмаған майҙанда аҙ ғына ашлама һәм һыу ҡулланып, күберәк йәшелсә алыу. Ғалимдар бындай һынауҙарҙы башҡа йәшелсәләрҙә лә дауам итергә уйлай.



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Ленинскому избирательному округу №7 **Дмитриевой Кристине Владимировне** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Сипайловскому избирательному округу №8 **Родине Елене Александровне** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Инорсовскому избирательному округу №2 **Нурлыгаянову Флюру Фаткулгаяновичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Сипайловскому избирательному округу №8 **Золотаревой Анне Фанилевне** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



**14 АВГУСТА**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]
11.45, 18.00, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Спортивная история. [12+]
12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
12.45 Счастливый час. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45, 3.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Ышан". [12+]
16.15 Надо знать. [12+]
16.45 Специальный репортаж. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Атлас Баженова. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Бай. [12+]
21.00 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Азовсталь. Освобождение". [16+]
0.00 Х/ф "Приключения экспоната". [12+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 "Отчаянная". [12+]
4.30 "Бай". [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 Следопыт. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**15 АВГУСТА**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]
11.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 18.00, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Ышан". [12+]
16.15 Финликбез. [12+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.00 Автограф. [12+]
17.30, 6.00 "Дорога к храму". [6+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Елкән. [6+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
23.45 "Курай даны". [12+]
0.00 Х/ф "Осторожно, дети!" [12+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Три аршина земли". [12+]
3.45 Бәхетнамә. [12+]
4.30 Үткән гүмер. [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**16 АВГУСТА**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Әлләсе... [6+]
10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]
11.00 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 18.00, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.30 Новости спорта (на рус. яз).
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Ышан". [12+]
16.15 Финликбез. [12+]
16.45 История одного села. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.00 Тайм-аут. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Тормош. [12+]
21.00 Vitadent. На грани бизнеса и науки. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Млечный путь". [12+]
0.00 Х/ф "Музыка крыш". [16+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]
3.45 Бәхетнамә. [12+]
4.30 Автограф. [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**17 АВГУСТА**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Годунов". [16+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 Башкирские каникулы. [12+]
10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]
11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 18.00, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Т/с "Ышан". [12+]
16.15 Патриот РФ. [12+]
16.45 Криминальный спектр. [16+]
17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
17.30 Дикая ягода. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Башкорттар. [6+]
21.00 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Д/ф "Муслим Магомаев. За всё тебя благодарю". [16+]
1.30 Новости (на баш. яз). [12+]
2.00 Спектакль "Песнь во сне". [12+]
3.45 Бәхетнамә. [12+]
4.30 Хазина о хазине. [12+]
5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "Это моя профессия". [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**18 АВГУСТА**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.40, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.05 Д/ф "Вторая мировая война. Операция "Багратион". [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди. Лучшее". [12+]
23.55 Х/ф "Стюардесса". [12+]
1.40 Х/ф "Цветы от Лизы". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Сәләм".
10.00 "Йома". [6+]
10.30, 12.15, 16.45, 19.45 История одного села. [12+]
10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 18.00, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [16+]
12.45 Пофутболим? [12+]
13.00, 5.00 Автограф. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Үткән гүмер. [12+]
14.15 "Курай даны". [12+]
15.00 Патриот РФ. [12+]
15.15 Т/с "Ышан". [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30 Дикая ягода. [12+]
19.00 "Честно говоря". [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]
23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Х/ф "Курортный туман". [16+]
1.45 Новости (на баш. яз). [12+]
2.15 Спектакль "Шауракай". [12+]
4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 Тормош. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**19 АВГУСТА**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Х/ф "По ту сторону счастья". [12+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Отдай свою жизнь". [12+]
0.40 Х/ф "Заклятые подруги". [12+]
4.10 Х/ф "Дочь баяниста". [16+]
5.52 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 Башкирские каникулы. [12+]
9.15 М/ф "Мультфильмы". [6+]
9.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
10.00 Елкән. [6+]
10.30 Байтус. [6+]
10.45 Семәр. [6+]
11.00 Лит-ра. [6+]
11.30 МузКәрәҙ. [6+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән гүмер. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Концерт Залии Ганиатуллиной "Дочь степей". [12+]
19.00 Интервью. [12+]
19.15 Д/ф "Настоящая". [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Х/ф "Швейцар". [16+]
1.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
2.15 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]
4.15 Әлләсе... [6+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

**20 АВГУСТА**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

6.10, 2.20 Х/ф "Любви все возрасты..." [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Мое сердце с тобой". [12+]
15.10 Петросян-шоу. [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
22.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Д/ф "Человек неунывающий". [12+]
3.58 Перерыв в вещании.

**БСТ**

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [6+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Курай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [6+]
10.15 "Городок АЮЯ". [6+]
10.30 М/с "Нурбостан". [6+]
10.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]
11.00, 19.30 "Атайсал. Знай наших!" [6+]
11.30 Сулпылар. [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 "Алтын тирмә". [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00 "Дорога к храму". [6+]
15.30, 4.30 Историческая среда. [12+]
16.00, 3.15 "Честно говоря". [12+]
16.45 "Волшебный мир театра". К 90-летию Салаватского государственного башкирского драматического театра. [12+]
18.30 "Автограф". [12+]
20.00 Интервью. [12+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 Д/с "Герои". [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус.яз.).
22.15 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Д/ф "Настоящая". [6+]
23.30 Х/ф "Верный". [6+]
0.45 "Женитьба". [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]


САМЫЕ УМНЫЕ ЛЮДИ



выдвинуты региональным отделением политической партии **"КОММУНИСТИЧЕСКАЯ ПАРТИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ"** Кандидат в депутаты Государственного Собрания - Курултая Республики Башкортостан седьмого созыва по Студенческому одномандатному избирательному округу №12
**Гайнуллина Махмуза Калимовна**
доктор медицинских наук, профессор, заслуженный врач Российской Федерации и Республики Башкортостан, главный научный сотрудник Уфимского НИИ медицины труда и экологии человека.
Она выступает:
**ЗА защиту интересов работающего человека!**
**ЗА социальную справедливость!**
**ЗА здоровую жизнь!**
**ЗА достойное будущее наших детей!**
Именно такие люди нужны в нашем Парламенте!
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Студенческому избирательному округу №12 Гайнуллиной Махмузе Калимовне на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Новиковскому избирательному округу №14 Самсоновой Екатерине Викторовне на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Вокзальному избирательному округу №13 Скорнякову Андрею Александровичу на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

**Ришат АЛЛАГУЗИН**



кандидат от партии **"Новые люди"**, председатель общества инвалидов г. Уфы
Я ПРЕДЛАГАЮ:
- Оставить большую часть сырьевых налогов в Башкортостане
- Уменьшить налоговую нагрузку начинающих предпринимателей
- Поднять зарплату учителям и врачам до 75 тысяч рублей
- Дать возможность посещать платные клиники по полису ОМС
- Запустить специальную программу по трудоустройству специалистов без опыта

Все упомянутые в материале предложения кандидатов и партии планируются к реализации в рамках законодательных инициатив и партийных проектов. Все упомянутые в материалах услуги были оказаны в период, когда избирательная кампания не велась.
Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Вокзальному избирательному округу №13 Аллагузину Ришату Хайретдиновичу на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Центральному избирательному округу №10 Шорову Рустаму Асламбековичу на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## ҺАУА ТОРОШО...

"Яндекс. Һауа торошо" порталы мәғлүмәттәре буйынса, йәйҙең һуңғы айында Башҡортостанда көндәрҙең йылы булыуы көтөлә. Августа көндөҙ уртаса температура +22 градус. Уртаса алғанда, 11 аяҙ, 11 аяҙлы-болотло, 8 ямғырлы һәм 1 болотло көн. Ай башында көндәр ҡояшлы һәм йылы, урыны менән ҡыҫҡа ваҡытлы ямғыр яуыуы ихтимал. Көндөҙ уртаса +22, +24, төндә +17, +18 градус була. Август уртаһында бер аҙ һалҡынайта - һауа температураһы көндөҙ +18, +20, төндә +13, 1+5 градус. Ай аҙағында көҙгөсә һауа торошо көтөлә, ямғырлы ла, аяҙ көндәр ҙә була. Көндөҙ +17, +18, төндә +13, +14 градус.

ПАРТИЯ НОВЫЕ ЛЮДИ

# БУДУЩЕЕ, ГДЕ ЛЮДИ ВАЖНЕЕ



**Амир Хамитов, депутат Государственной Думы ФС РФ:** "Новые люди" в Госдуме требуют разрешить пересдачу ЕГЭ в течение месяца для всех школьников, защитить от признания иностранными агентами учителей, работников ВУЗов, образовательные организации, поднять стипендии до уровня МРОТ и многое другое.

По нашим обращениям ликвидирована свалка на Алтае, остановлена работа золотодобытчиков, нарушающих нормы добычи в Хакасии, потушена горящая свалка в Дагестане, пресечено уничтожение краснокнижных растений в Чувашии.

Одно из основных направлений деятельности - защита предпринимательства. По нашему предложению правительство в 2023 году повысит в 1,5 раза максимальный размер возмещения ущерба для привлечения к ответственности по статье УК о мошенничестве в связи с неисполнением договорных обязательств в сфере предпринимательства. Были законодательные инициативы по защите собственников от незаконного изъятия имущества, увеличению максимального размера микрозаймов для МСП до 7 млн рублей, освобождению субъектов МСП от платы за участие в госзакупках и др.

С особым вниманием следим и помогаем развитию молодежного предпринимательства. За это время "Новые люди" запустили программу обучения предпринимательству "Я в деле", добились дополнительных 450 млн рублей на поддержку этой сферы, разработали законопроект о первичном трудоустройстве: льготы для тех, кто берёт сотрудников без трудового стажа, предложили выделить дополнительные гранты. Мы также предлагаем дать отсрочку от армии молодым предпринимателям.

За короткий период существования фракции в стенах Госдумы мы успели многое и на этом не собираемся останавливаться".



**Руслан Давлетшин, руководитель отделения партии "Новые люди" в Республике Башкортостан:** "За этот год мы провели несколько масштабных мероприятий для молодежи республики. Активно проводили мероприятия для консолидации современной молодежи, налаживания диалога между поколениями. Одним из них стал масштабный Международный фестиваль современной молодежной культуры и киберспорта "Северные амуры". Молодые люди напрямую общались с известными киберспортсменами СНГ. В рамках фестиваля также провели конкурсы по разным направлениям современной молодежной культуры - от танцев до косплея. Участники мероприятия посетили образовательные лектории, в которых выступали топовые спикеры из Москвы. Также состоялась выездная встреча рабочей группы по киберспорту при Госдуме РФ с представителями власти Узбекистана, Кыргызстана и Башкортостана для создания международного экспертного сообщества для развития киберспортивной индустрии и игровой разработки в России и в СНГ.

Актуальные события, волнующие страну сегодня, также не остаются в стороне от нашего внимания. Мы несколько раз организовали и отправили гуманитарную помощь участникам специальной военной операции на Украине. На базе нашего штаба в Стерлитамаке организовали пошив носилок и переносок.

В разных городах и районах Башкортостана прошли встречи с депутатом Госдумы Амиром Хамитовым. Жители региона обращались к нему с различными проблемами, некоторые из них уже удалось решить".



**Зульфия Гайсина, председатель Совета по правам человека при Главе РБ:** "Партия "Новые люди" выступает за развитие как самого гражданского общества, так и страны в целом. Самое важное для членов партии и ее сторонников - люди и основополагающие в любом здоровом обществе ценности, такие как честность и открытость, право и закон, реализация возможностей и удовлетворение потребностей, свобода и равенство, конструктивная и обоснованная критика. Мой идеальный мир - право, закон и объективность, большая часть программных тезисов партии "Новые люди" как раз об этом.

В правозащитной деятельности я помогаю жителям Башкортостана решать сложные ситуации в сфере ЖКХ, вопросы газификации и догазификации, налаживать отношения с ресурсоснабжающими организациями и регоператорами по обращению с ТКО, а также защищать права мобилизованных граждан и их семей. Много обращений с вопросами по обеспечению социальных гарантий инвалидам, многодетным семьям, детям-сиротам и детям, оставшимся без попечения родителей, участникам боевых действий и труженикам тыла. В качестве депутата благодаря законодательным инициативам смогу решать эти проблемы в корне".

Все упомянутые в материале предложения кандидатов и партии планируются к реализации в рамках законодательных инициатив и партийных проектов.
Все упомянутые в материалах услуги были оказаны в период, когда избирательная кампания не велась.

Печатная площадь предоставлена безвозмездно избирательному объединению "Региональное отделение в Республике Башкортостан Политической партии "НОВЫЕ ЛЮДИ" на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Первомайскому избирательному округу №3 **Кидрасову Юлаю Фаукатовичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Студенческому избирательному округу №12 **Харасову Салавату Фаттаховичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Белореченскому избирательному округу №5 **Локотченко Алексею Юрьевичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

ЛДПР
*помогает*

Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Сипайловскому избирательному округу №8 **Ивановой Олесе Александровне** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 13 АВГУСТ - БӨТӘ ДОНЪЯ ҺУЛАҠАЙҘАР КӨНӨ

Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса Ер шарындағы һәр етенсе кеше һулаҡай. Ғалимдар әйтеүенсә, был кешенең генетикаһы менән дә бәйле һәм ул нәҫелдән тапшырылырға ла мөмкин. Ғалимдар һулаҡай һәм уң ҡуллылыҡ баш ярымшарҙары эшмәкәрлегенең әүҙемлегенә бәйле, тип тә аңлата. Әгәр беренсе ярымшар бик әүҙем булһа, ул саҡта бала һулаҡай була, ти улар. Ә мейененң уң ярымшары кешенең ижади үҫешенә нығыраҡ булышлыҡ итә. Шуға ла һулаҡайҙар тормошта бар нәмәгә ижади ҡарай.

Элек һулаҡайҙарҙы ғәҙәттән тыш күренеш тип иҫәпләгәндәр, уларҙы ихтыярҙарынан тыш уң ҡулға өйрәтергә тырышҡандар. Ләкин үткән быуат аҙаҡтарында һулаҡай балаларҙы тәрбиәләүгә ҡараш үҙгәргән. Бала ниндәйҙер имгәнеү арҡаһында ғына һул ҡулы менән яҙа, эшләй башлаған икән, ул саҡта уны унға өйрәтергә мөмкин, ләкин һулаҡай булып тыуған баланы уң ҡуллыға өйрәтергә тырышырға ярамай, был баланың һәләтлектәрен сикләүгә, һөҙөмтәлә, уның нервылары ҡуҙғыуға килтерергә мөмкин, тигән һығымта яһалған.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**30-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Асҡыс. Тиббетс. Бакалавр. Садако. Хәреф. Лайм. Нансук. Янки. Орлоҡ. Ҡар. Трал. Айыу. Ата. Трумэн. Туҡай. Ҡауҙы. Ураҡ. Шура. Шаҙра. Әтәс. Аран.

**Вертикаль буйынса:** Хирохито. Барҡылдаҡ. Фирҡә. Таба. Рәхмәт. Ләлә. Сабата. Аҡҡош. Яра. Аҡса. Роман. Утыҙ. Ситән. Рада. Суини. Утаҫма. Тауыш. Ағас. Одеколон.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҪӘРЛЕК ҠЫСҠЫРҺА...

## аҡыл шымып торһон

Дөрөҫлөк килеп еткәнсе, ялған бөтөн донъяны ялмап алыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Яҡындарына мөхәббәт сикһеҙ булмай, сөнки һәр кем иң тәүҙә үҙ-үҙен ярата.

**(Августин).**

Ҡатын-ҡыҙ бер ҡасан да аҡса өсөн кейәүгә сыҡмай. Сөнки бының алдынан ғашиҡ булырға уларҙың аҡылы етә.

**(Чезаре Павезе).**

Нимә эшләргә кәрәк, барыһы ла эшләнгән, хәҙер иһә нимә эшләмәҫкә кәрәк икәненә иғтибар итергә ваҡыт.

**(Макс Бирбом).**

Үҙең турала насар һөйләмә - кешеләр шаяртыуҙы аңламай.

**(Януш Васильковский).**

Күп кешеләр өсөн тәҙәлеү - ул етешһеҙлектәрен алмаштырыу ғына.

**(Вольтер).**

Кешеләр булмаған ерҙә лә, кеше булып ҡалырға тырыш.

**(Гиллель Старший).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ишәк Юлбарысҡа: "Үлән күк төҫтә", - тип әйтә икән. Юлбарыҫ: "Юҡ, үлән йәшел", - тип яуаплай. Икәү-ара бәхәс сыға. Бер һүҙгә килә алмай, дөрөҫлөк эҙләп, улар Арыҫланға бараларҙар. Урман батшаһының тәхетенә етер-етмәҫтән Ишәк:**

**- Ғәли йәнәптәре! Ысынлап та үлән күк төҫтә лә инде! - тип ҡысҡыра. Арыҫлан уға:**

**- Шулай, үлән күк, - тип яуап бирә. Ишәк ҡыуанып дауам итә:**

**- Юлбарыҫ минең менән риза түгел, үлән йәшел тип әйтә, берүк уны язаға тарттырығыҙ әле...**

**- Юлбарыҫ биш йыл өндәшмәүгә хөкөм ителә! - ти йәнлектәр батшаһы.**

**Ишәк ҡыуанысынан "Үлән күк, үлән күк..." тип йырлай-һикерә ары китә.**

**- Ғәли йәнәптәре, ни өсөн? Үлән йәшел дәһә! - тип аптырай Юлбарыҫ.**

**- Эйе, ысынында йәшел.**

**- Шулай булғас, һеҙ мине ниңә хөкөм итәһегеҙ?**

**- Хөкөмдөң үлән төҫө менән бер бәйләнеше лә юҡ. Мин яҙаны һиңә, иң батыр һәм аҡыллы йәнлеккә, ишәк кеүек алйот менән бәхәсләшеп торғаның өсөн бирәм, - тигән Арыҫлан.**

**Һығымта: алйот менән бәхәсләшеү - ваҡытты мәғәнәһеҙ әрәм итеү. Үндәйҙарға һинең дөрөҫлөгөң кәрәкмәй, үҙ һүҙен өҫкә сығарыу мөһим. Мәғәнәһеҙ бәхәстәргә ваҡыт әрәм итмәгеҙ. Иҫәрлек ҡысҡырғанда аҡыл шымып тора".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23031

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2700
Заказ - 1085